ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

# Киске Өфө

3-9 ғинуар (һыуығай) 2015

№ 1 (627)

kiskeufa.ru • blog.kiskeufa.ru • 2002 йылдан башлап сыға • һатыуҙа хаҡы иреккле

## БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:

**Беҙ түҙемле лә ул, ә башҡалар?**



3

**Аҫалы балаҫ һуғайыҡ!**



6

**Атай менән әсәйҙән тора…**

балаларҙың тәртибе лә, рух ныҡлығы ла



8-9

**Күк кәзә йылы…**

ауырлыҡтарҙы еңеү йылы тип нарыҡлана



12-13

**ТВ-программа** 14

***Кәзә (Ҡуй) йылы яҡшылыҡ һәм яҡтылыҡ энергетикаһы алып килә, ул рухи күтәренкелек, ғәйрәтлелек һәм йомшаҡлыҡ символы. Ләкин был хайуандың ослo ғына ике мөгөҙө барлығы хаҡында ла онотorға ярамай - кәрәк булһа, һөҙөргә лә күп һорамаҫ. Шуға ла яңы йылда ярҙамсыллыҡ һәм киң күңеллелек кеүек сифаттар баһалы буласаҡ, тип ышандыра астрологтар. Ә кемгәлер яуызлыҡ эшләү йәки насар уйлы булыу, киреһенсә, һәр башланғысҡа кәртә ҡуйып, пландарҙың тормошҡа ашыуына ҡамасаулаясаҡ, ти улар.***

ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

## Яңы йылға ниндәй уңыштар, өмөттәр һәм фараздар менән аяҡ баҫаһығыҙ?

***Фәкиһә ТУҒЫҘБАЕВА, Башҡортостандың халыҡ шағиры, журналист:*** Яңы йыл - һәр ваҡыт, һәр йәштә лә тулҡынланып көтөп алынған күңел байрамы, мөғжизәле бер мәл ул. Кем генә булмаһын: йәше-карты, бала-сағаһы, сәләмәте, сирлеһе - Яңы йылды бөтәһе лә яңы өмөттәр бағлап ҡаршылай, өр-яңы хыялдар ҡора, тыуып килгән йыл үткәненә ҡарағанда матурыраҡ, уңышлыраҡ, емешлерәк буласағына ышана. Халҡыбыҙ борондан килгән мосолман календарына нигеҙләнеп фаразлауынса, мөсәлдәге Ҡуй йылы тыныс, матур, ырыҫлы йылдарҙың береһе булараҡ ҡылыҡһырлана. Артабан да шулай була күрһен, тип теләйем.

Ҡасан ғына әле үҙҙәрен цивилизация һәм демократия тантана иткән илдәр тип танытырға тырышҡан бәғзе бер даирәләрҙең бөтөн кешелек алдында агрессив көскә туплаһып, халыҡ-ара хоҡуҡ һәм әхлаҡ нигеҙҙәренә һыйғыһыҙ ҡылыҡтар ҡылыуы планетабыҙҙа именлек, татыулыҡ принциптарын тағы һынау аҫтына ҡуя. Ил Президенты Владимир Путин Федераль Йыйылышҡа быйылғы Мөрәжәғәтнамәһендә белдереүенсә, "Алда ҡатмарлы һәм көсөргәнешле мәл, һәм күп нәмә һәр ҡайһыбыҙҙың үҙ урынында нисек эшләүенән тора". Ысынлап та, көндәлек хеҙмәтебеҙҙең бөгөн илебеҙ ҡеүәтен һәм абруйын нығытыуға булышлыҡ итеүе хаҡында онотorға ярамай, ваҡытында кешелекте фашист ҡоллоғонан азат иткән ҡаһарман быуын балалары бит әле беҙ! Президенттың һүҙҙәре ижад өлкәһендә эшләүселәргә лә туранан-тура ҡағыла, сөнки әҙәбиәт - халыҡтар дуҫлығы, туғанлыҡ илсеһе булараҡ, ғүмер-ғүмергә Ер йөҙөндә тыныслыҡты нығытыуға булышлыҡ итеп килә. Яңыраҡ ҡына үҙемә "Башҡортостандың халыҡ шағиры" исеме бирелеүҙе лә мин киләһе йылдарҙы яңынан-яңы ижад емештәре менән ҡаршылау бурысы тип ҡабул итәм. Ишек ҡағыусы 2015 йылдың Әҙәбиәт йылы тип иғлан ителеүе иһә әлеге ҡатмарлы мәлдәрҙә яҙыусыларыбыҙҙан илһөйәрлек, рухи ҡаһарманлыҡ идеяларын алға ҡуйыусы әҫәрҙәр ижад итеүҙе көтә. Иң мөһиме - бер-беребеҙгә терәк булып, берҙәм булып, бер-беребеҙгә ярҙам итеп, бер-беребеҙҙең ҡыуанысына ҡыуанып йәшәйек. Илдә берҙәмлек булһа, беҙҙе бер ниндәй санкциялар ҙа еңә алмаясаҡ.

***Данир ҒӘЙНУЛЛИН, Башҡортостан Республикаһының Күсемһеҙ мәҙәни мирас объекттарын һаҡлау һәм ҡулланыу буйынса ғилми-производство үҙәге директоры:*** Юҡҡа ғына үтеп барған йыл Йылҡы йылы һаналмағандыр, егелеп эшләргә лә, тырышлығыбыҙҙың һөҙөмтәләрен күреп ҡыуанырға ла яҙҙы. ШОС һәм БРИКС илдәре саммитына әҙерлек барышында баш ҡаланың бик күп йорттарына БР Күсемһеҙ мәҙәни мирас объекттарын һаҡлау һәм ҡулланыу буйынса ғилми-производство үҙәге реставрациялар эшләне. Шулай уҡ, башҡорт халҡының боронғолоғон, бай тарихын сағылдырып торған, иң ҙур тарихи ҡомартҡыларыбыҙҙың береһе булған Шүлгәнташ мәмерйәһен ЮНЕСКО-ның тарихи ҡомартҡылар исемлегенә тәҡдим итеп, "Шүлгәнташ" мәмерйәһе музейы һәм солоҡсолоҡ музейын төҙөй, Йылҡысыҡҡан күлен тәртипкә килтерә башланыҡ. Быйыл Йылҡысыҡҡан күле буйында ҡуйыласаҡ Аҡбуҙат һынының проекты эшләнде, киләһе йыл уны урынлаштырырбыҙ, тип уйлайым. Шулай уҡ, Шүлгәнташ мәмерйәһе таштарындағы һүрәттәрҙең датаһын Австрия ғалимдары менән берлектә яңынан билдәләйәсәкбеҙ, беҙҙең фаразлауҙарға ярашлы, был яҙыуҙар тағы ла 3-4 мең йылға боронғораҡ булырға тейеш.

Киләһе 2015 йыл "Әҙәбиәт йылы" тип нарыҡланыуға ҡарамаҫтан, республикала тарихи ҡомартҡыларҙы яңыртыуға иғтибар шулай уҡ юғары булып ҡалыр, моғайын. Рәсәйҙәге иҡтисади хәлдәр халҡына хеҙмәт итергә маҡсат ҡуйған кеше өсөн ҡамасау булмаҫ, һәр кемдең үҙ эшен тырышып, еренә еткереп башҡарыуы ғына шарт. Ә минең инде киләһе йылға эш планым төҙөлгән, уның һәр пункты уңышлы үтәлер, маҡсаттарыбыҙға өлгәшербеҙ, тип өмөтләнәм. Яңы йылда башҡорт халҡының ауыҙ-тел ижады ҡомартҡыларына, яҙыусы һәм шағирҙар ижадына иғтибар артыр, был йыл йәш быуында китаптарға ҡарата ҡыҙыҡһыныу тәрбиәләүгә, үҙебеҙҙең бөйөк әҙиптәребеҙҙең әҫәрҙәрен ҡабаттан уҡып сығырға этәргес булыр, моғайын. Мин үҙем Мостай Кәрим, Яныбай Хамматов, Булат Рафиҡов кеүек яҙыусыларыбыҙҙың әҫәрҙәрен яңынан ҡулға алып, уҡып сығырға ниәтләйем.

**(Дауамы 2-се биттә).**

## Яңы йыл менән!

*Йыл хужаһы - күк бәрәстең*
*Эй, дарҫлай шул йөрәге!..*
*Тотош Йыл ҡулымда саҡта*
*Тағы ни һуң кәрәгер?!*

*Ҡасмаҫ әлек мамыҡҡайым,*
*Тегеңә шыбырлайым:*
*"Бөгөнгө һымаҡ, көн һайын*
*Әйҙә, бергә уйнайыҡ!"*



Зиннур Боҫҡонов фотоһы.

✓ ***Мәҙәниәтебеҙ, телебеҙ, рухыбыҙ нигеҙҙә ауылдарҙа һаҡлана. Быға тиклем бөтөн илде туйҙырған ауылдың хәлен яҡшыртыуҙа дәүләтебеҙ хәстәрлеге төп урынды биләп торһон ине.***

*БЫЛ АЙҘА...*

# ШӘЙЕХЗАДА БАБИЧ ТЫУҒАН!



**Яңы йылдың тәүге айындағы оҙайлы байрамдарҙы беҙ хәҙер "ҡышҡы каникулдар" тип тә һөйләргә өйрәндек. Ғинуар башында Рәсәй халҡы ун көндән ашыу эш, уҡыуҙар һәм башҡа төрлө мәшәҡәт, ығы-зығыларҙан тынып, "ҡышҡы йоҡоға" тала.**

Кемдәргәлер бик тә оҡшай был, бәғзе берәүҙәр - һәр ваҡыт хәрәкәттә, эш менән булып өйрәнгән тынғыһыҙ кешеләр, киреһенсә, яратмай был көндәрҙе. Ләкин, нисек кенә булмаһын, байрам законлаштырылған, шуға күрә әлегә ундай мөмкинлек бар икән, йоҡо - аш бүлмәһе - диван - телевизор маршрутын ун көн буйы рәхәтләнеп саңғыла уҙышып, боҙҙа шыуып, хоккей уйнап, мәкелә балыҡ ҡармаҡлап, бына тигән сәләмәтлек көндәренә әйләндерергә мөмкин. Хужабикәләрҙең дә йорт эштәре йыйылып киткәндер, моғайын.

Каникулдарҙы һөнәри байрамдар дауам итә был айҙа: 12 ғинуарҙа - прокуратура хеҙмәткәрҙәре, ә иртәгәһенә (13-ө) - Рәсәй матбуғаты көнө, ай аҙағынараҡ, йәғни 25 ғинуарҙа Рәсәй студенттары көнө билдәләнә.

Ғинуарҙың шундай үҙенсәлегеме - байрамдарға ғына түгел, ә билдәле шәхестәребеҙҙең юбилейҙарына ла бик бай икән был ай. Мәҫәлән, ғинуарҙа яңы ғына "Башҡортостандың халыҡ шағиры" исеменә лайыҡ булған Факиһа Туғыҙбаева, исеме сит илдәрҙә лә билдәле ғалимә, филология фәндәре докторы, профессор Фирҙәүес Хисаметдинова һәм тарих фәндәре докторы, профессор Роза Буканова өсәүләп үҙҙәренең күркәм юбилейҙарын билдәләһә, яратҡан шағирыбыҙ, быуындар кумиры, башҡорт милли хәрәкәт эшмәкәре Шәйехзада Бабичтың тыуыуына 120 йыл тула. Шәйехзада Бабич тыуған 2 ғинуар көнөндә (тыуған көндәре тап килеүен бер ҙә генә осраҡлы тип әйтеп булмай) халҡыбыҙҙың илһөйәр улы, философия фәндәре докторы, профессор, йәмәғәт эшмәкәре Дамир Вәлиевтың да тыуыуына - 75 йыл. Һәм, ғөмүмән, календарға күҙ һалһаң, ғинуарҙың тотош ҙур төркөм ижад кешеләре йондоҙлоғо икәнлеген асыҡлайһың. 10 ғинуарҙа үҙе иҫән саҡта уҡ "Башҡортостан һандуғасы" тип йөрөтөлгән танылған йырсы Мәғәфүр Хисмәтуллиндың тыуыуына 100 йыл тула. Талантлы яҙыусы, Салауат Юлаев исемендәге дәүләт премияһы лауреаты Яныбай Хамматов ( тыуыуына - 90 йыл), композиторҙар Абрар Ғабдрахманов (80 йыл), Нариман Сабитов ( 95 йыл) менән Рәүеф Мортазин (105 йыл), халыҡ таланты - оҫта ҡурайсы Кәрим Дияров (105 йыл), йырсы Илфаҡ Смаҡов (75 йыл) шулай уҡ ошо айҙа тыуғандар. Бәхетле ай, нурлы ай, ҡарлы-йырлы, моңло ай...

Әйткәндәй, Рәсәй матбуғаты көнө, тигәйнек урта төштәрәк. Журналистарҙың Ш. Хоҙайбирҙин исемендәге премия лауреаттары Әхмәр Үтәбай (55 йәш) менән Рәлис Ураҙғолов та (50 йәш) матур юбилейҙарын билдәләйәсәк был айҙа. Форсаттан файҙаланып, ҡәләмдәштәребеҙҙе Яңы йыл һәм ғүмер тантаналары менән ихлас ҡотлайбыҙ, илһамлы ижад, һаулыҡ, ғаилә бәхете теләйбеҙ!

*ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...*

# *Яңы йылға ниндәй уңыштар, өмөттәр һәм фараздар менән аяҡ баҫаһығыҙ?*




**(Башы 1-се биттә).**

***Зиннур ЙӘРМӨХӘМӘТОВ, БДУ-ның Сибай институты директоры, иҡтисад фәндәре докторы, профессор:*** Башҡорт дәүләт университетының Сибай институты йылды уҡыу, фән, спорт, мәҙәниәт, йәғни һәр өлкәлә яуланған ифрат ҙур ҡаҙаныштар менән тамамлай. Ниндәй генә тармаҡты алһаҡ та, алға китеш һиҙелә. Иҡтисад факультеты студенттарының "Студенттар - ирекле эшҡыуарлыҡта" тип аталған Бөтә Рәсәй конкурсында еңеп, октябрь айында Пекинда Рәсәй данын яҡлап ҡайтыуын иң ҙур еңеүҙәр рәтендә билдәләргә мөмкин. Әлбиттә, студенттарыбыҙҙың донъя кимәлендә беренсе тапҡыр сығыш яһауы түгел, 2008 йылда ла беҙҙең команда Рәсәйҙә иң яҡшыһы тип табылды һәм Сингапурҙа уҙған Халыҡ-ара ярышта ҡатнашты. Бынан тыш, педагогтар, юристар, технология, тәбиғи-математика факультеты студенттарының һәр береһе Бөтә Рәсәй бәйгеләрендә ҡатнашып, гел беренсе урын алыуға өлгәште. Юридик факультет студенты Ксения Борисова БР Президенты стипендияһына лайыҡ булды. Бер кемгә лә сер түгел, бөгөн бюджет урындары кәмей, шуға ла беҙ ситтән тороп уҡыу, йәғни дистанцион белем биреүгә ҙур иғтибар бүләбеҙ. Бының өсөн махсус сайт булдырылды һәм эш башланды. Студенттар һәр яҡлап үҫеш алһын, тип тырышабыҙ, сөнки бөгөнгө заман йәш кешенән иҫ киткес әүҙемлек, йылдамлыҡ һәм һәр өлкәлә мәғлүмәтле булыуҙы талап итә. Шуға ла беҙ уҡытып сығарған белгестәр тормош тулҡындарында юғалып ҡалмаҫтар, тип уйлайым.

Иҫ киткес талантлы балалар уҡый беҙҙә. Улар үҙешмәкәр сәнғәт түңәрәктәрендә ихлас ҡатнаша. "Ете ырыу", "Сармат" бейеү ансамблдәре ойошторҙоҡ, төрлө түңәрәктәр эшләй. Бына ошо ансамблдәр ағымдағы йылда ҙур еңеүҙәргә өлгәште. Пермдә Бөтә Рәсәй фестивалендә сығыш яһап, алдағы йылда Мәскәүҙә үтәсәк бөйөк Еңеүҙең 70 йыллығына арналған тантанаға саҡырыу алдылар. Әле яңыраҡ ҡына улар "Байыҡ" телевизион конкурсында сығыш яһап, фестивалдең Беренсе дәрәжә дипломына лайыҡ булды. Иҡтисади ауырлыҡтарға ҡарамаҫтан, төҙөлөш эштәрен дә алып барҙыҡ. Уҡыу йорто биләмәһендә студентҡа һәйкәл астыҡ, яңы ҡаҙанлыҡ һәм технология факультеты студенттары өсөн уҡыу лабораторияһы төҙөнөк. Был корпус беҙгә буласаҡ техник белгестәр әҙерләргә, унда практик дәрестәр үткәрергә ярҙам итәсәк.

Шуны ла әйтеп үтеү урынлы булыр: һуңғы ғилми советта Сибай институты менән Сибай күп тармаҡлы профессиональ колледжы араһында ике яҡлы хеҙмәттәшлек хаҡында килешеү төҙөлдө. Был ике уҡыу йорто өсөн дә бик файҙалы документ буласаҡ. Белеүегеҙсә, беҙ институтта спортҡа, сәләмәт йәшәү рәүешенә ҙур иғтибар бирәбеҙ. Өс спорт залы бар, уҡтан атыу, футбол, волейбол, теннис, кикбоксинг, милли көрәш, хоккей буйынса түңәрәктәр алып барыла. Быйыл яҡтыртылған саңғы трассаһы астыҡ һәм Урал төбәге спортсылары ҡатнашлығында киске саңғы ярыштары уҙғарҙыҡ. Төйәләҫ йылғаһы буйындағы ярҙамсы хужалығыбыҙҙа йылҡы малы, умарта тотабыҙ. Халыҡты спортҡа йәлеп итеүҙең тағы ла бер ысулы - ул да булһа, ГТО нормаларын тапшырыу. Беҙ был эште бынан өс йыл элек үк башлап ебәргәйнек, әле спорттың ҡышҡы төрҙәре буйынса ГТО нормаларын тапшырырға әҙерләнәбеҙ. Бөйөк Еңеүҙең 70 йыллығына әҙерлек беҙҙә күптән башланды, мәҫәлән, яҙ көнө үк институттың комплекслы музейын астыҡ, унда 112-се Башҡорт кавалерия дивизияһының данлы тарихына, уның легендар комдивы генерал Шайморатовҡа арнап, махсус стенд булдырҙыҡ.

Сибай институты коллективы Мәҙәниәт йылын бына ошондай эштәр менән тамамланы һәм Әҙәбиәт йылына ла яҡты ниәттәр, аҡ өмөттәр менән аяҡ баҫабыҙ.

***Мөхтәр МОНАСИПОВ, Баймаҡ районы Ярат ауылының "Атайсал" аҡһаҡалдар ҡоро етәксеһе:*** 2015 йылда хөкүмәтебеҙ, министрлыҡтар һәм депутаттар ауыл тормошон яҡшыртыу, тормош шарттарын еңеләйтеү буйынса эшлекле закондар ҡабул итер, тигән өмөт бар. Башҡортостан Президенты үҙенең бер сығышында эшләгән кешенең етеш тормошта йәшәргә тейешлеген айырым-асыҡ һыҙыҡ өҫтөнә алды. Етәкселектең ауылға йөҙ менән боролоуы үҙе үк күп нәмә хаҡында һөйләй - республика халҡының күпселеге ауылдарҙа йәшәй бит. Мәҙәниәтебеҙ, телебеҙ, рухыбыҙ нигеҙҙә ауылдарҙа һаҡлана. Быға тиклем бөтөн илде туйҙырған ауылдың хәлен яҡшыртыуҙа дәүләтебеҙ хәстәрлеге төп урынды биләп торһон ине. Милләттәштәремә шуны әйтер инем: бер кемдән дә бер нәмә лә көтөп ятмаһындар. Һәр ауылда көслө һәм зыялы башҡорт йәмғиәттәре булдырырға ынтылырға кәрәк. Аҡһаҡалдар, Ағинәйҙәр, Ир-егеттәр ҡорҙары, шулай уҡ уҡытыусылар, мәҙәниәт хеҙмәткәрҙәре бергә эшләгәндә генә уңышҡа өлгәшергә мөмкин. Беҙҙең Ярат ауылында "Имен ғаилә", "Ир-егеттәр абруйы", "Герой әсәләр","Ғүмер бер генә" тигән, шулай уҡ халыҡ йолаларын, кәсептәрен өйрәнеү, таратыу буйынса проекттарыбыҙҙың уңышлы тормошҡа ашырылыуы шуға бер дәлил булып тора ла. 2014 йылда яраттар "Айыҡ ауыл-2014" конкурсына дәррәү ҡушылды. Йылҡы йылы ауыл халҡын, айырыуса йәш быуынды сәләмәт тормош алып барыуға йәлеп итеү, рухиәтебеҙгә, мәҙәнилеккә яҡынайтыусы этәргес көс булды. Яңы йыл алдынан ошо конкурсты ойоштороп, яныпйүгереп йөрөгән "Атайсал" клубы ағзалары, ағинәйҙәр, "Ир-егеттәр ҡоро" рәйесе Илгиз Йәнбирҙинға, мәктәп коллективына, директоры Миләүшә Юлдашбаеваға һәм бөтөн ауылдаштарыма "Киске Өфө" гәзите аша ихлас рәхмәттәремде еткерәм. Әлеге көндәрҙә беҙ Ярат менән Ишмөхәмәт ауылдарында территориаль йәмәғәт үҙидаралығы (ТОС) ойоштороу эштәре менән мәшғүлбеҙ, уны ла уңышлы тормошҡа ашырырыбыҙға шигем юҡ.

**Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА яҙып алды.**

## НИМӘ? ҠАЙҘА? ҠАСАН?

✓ Башҡортостан Президенты Рөстәм Хәмитов Мәскәүҙә Рәсәй Федерацияһының Дәүләт Советы һәм мәҙәниәт һәм сәнғәт буйынса Рәсәй Президенты ҡарамағындағы Совет ултырышында ҡатнашты. Рәсәй Президенты Владимир Путин үҙенең Указы менән Дәүләт мәҙәниәт сәйәсәте нигеҙҙәрен раҫлауы тураһында хәбәр итте. Ул ижад азатлығын тәьмин итеү, Рәсәй халыҡтарының мәҙәни мираҫын һаҡлау һәм файҙаланыу, рус һәм милли телдәрҙе, әҙәбиәтте үҫтереү, шәхес тәрбиәләү өсөн уңайлы мәғлүмәти мөхит булдырыу мәсьәләләренә лә ҡағылды.

✓ Башҡортостан Президенты Рөстәм Хәмитов Мәскәүҙә Волга буйы федераль округы төбәктәрендә балалар һәм үҫмерҙәр хоккейына ярҙам итеү буйынса Попечителдәр советы ултырышында ҡатнашты. Сарала округ йәштәре араһында сәләмәт тормошто популярлаштырыу өсөн балалар һәм үҫмерҙәр хоккейының әһәмиәте, ошо хәрәкәттең төп үҫеш йүнәлештәре һәм уға округ, төбәк кимәлендә булышлыҡ итеү буйынса саралар билдәләнде, шулай уҡ "Алтын шайба" турнирын үҫтереү планы тикшерелде.

✓ Башҡортостан Президенты Рөстәм Хәмитов үткәргән республика Хөкүмәте ултырышында бер нисә иҡтисади мәсьәлә ҡаралды. Сара барышында "Башҡортостан Республикаһында стратегик планлаштырыу тураһында" закон проекты тикшерелде, кадастр баһаһы һөҙөмтәләре һәм участкаларҙы льготалы хосусилаштырыу мөмкинлектәре, шулай уҡ халыҡҡа дәүләт һәм муниципаль хеҙмәттәрҙе электрон төрҙә күрһәтеү хаҡында һүҙ алып барылды.

✓ БР Дәүләт Йыйылышы - Ҡоролтай депутаттары былтырғы һуңғы пленар ултырышта "Башҡортостан Республикаһы Башлығы тураһында"ғы закон проектын ҡараны. Закон проекты 27 ноябрҙә тәүге уҡыуҙы үтте. Депутаттар проектҡа тәҡдим ителгән ете төҙәтмәне хупланы һәм икенсе һәм өсөнсө уҡыуҙа норматив акт ҡабул итте. Закон проекты республиканың иң юғары вазифалы кешеһенең исемен үҙгәртеү менән бәйле һәм Башҡортостан Республикаһы Башлығы эшмәкәрлегененең хоҡуҡи нигеҙҙәрен һәм хоҡуҡ гарантияларын билдәләй.

✓ *Һәр кем толерантлы була алмай. Күңеле керһеҙ, изгелекле, яҡты уйлы, иманлы һәм дә тәбиғәте менән юғары мәҙәниле Аллаһ балалары өсөн генә хастыр был сифат.*



*КИЛЕШМӘЙЕМ!*

# БЕҘ ТҮҘЕМЛЕ ЛӘ УЛ, Ә БАШҠАЛАР?



**Түҙемлек, тигәндән, беҙҙең башҡортта инде ул ундай хазина! Тап шул арҡала, йәғни республикаға исем биргән халыҡтың түҙемле булыуы арҡаһында (хәҙер инде уны толерантлылыҡ тиҙәр) башҡа милләт вәкилдәре өсөн йәннәттер ул беҙҙең Башҡортостаныбыҙ.**

Элек-электән түҙемлелек, киң күңеллелек күрһәткән, толерантлы булған халҡым һәм был әлеге көндә лә шулай дауам итә. Күңелдең киңлеге шуға тиклем барып еткән ки: бөгөнгө көнгә аҫаба башҡорт ерендә йәшәп ятҡан милләттәр һаны 160-ҡа тулып киткән, имеш! Ҡайһы берәүҙәр был мәғлүмәтте оло ҡаҙаныш күреп, яйы сыҡҡан һайын миҙал йә флаг урынына болғарға ярата. Шул уҡ ваҡытта улар бер нәмәне иҫәпкә алмай: ана шул үҙ ерендә һәм үҙ ере хаҡына күпте күреп, күпте кисергән халыҡҡа ҡарата мөнәсәбәттең түҙеп торғоһоҙ була барыуы ғына һис борсомай маңҡорттарҙы. Башҡорт халҡының ҡанлы һәм дә ҡаһарман тарихы биттәрен һанламау, уның аҫабалыҡ хоҡуғын, шуға дәлил мәғлүмәттәрҙе әйләнгән һайын юҡҡа сығарырға маташыуҙар, тарих ҡатламдарында ҡалған эҙҙәрҙе нисек тә юйырға, бысраҡҡа буярға тырышыуҙар бер ҙә генә халҡыма ҡарата толерантлы мөнәсәбәт тураһында һөйләмәй. Тарихи мәғлүмәттәрҙе күҙгә элмәйенсә, ҡоро инҡар итеүгә ҡоролған фараздарын берҙән-бер дөрөҫ ҡараш, "һуңғы инстанция" тип раҫларға маташыуҙар иң дөрөҫө була инде, улайһа?

Бер-береңә түҙемле, ихтирамлы булыумы, сабырлыҡ күрһәтеүме - толерантлыҡ төшөнсәһен нисек кенә әйләндереп, нисек кенә тулғандырма, уға ниндәй генә синонимдар эҙләмә - әгәр ҙә был күп милләттәр йәшәгән төбәк эсендәге бер йә бер нисә генә халыҡҡа хас сифат икән, тимәк, был түҙеү, биткә төкөрөүҙе ҡабул итеү, йәғни күнеү тип атала. Ә толерантлыҡ - ул күп ҡырлы булһа ғына үҙ-ара ихтирамды аңлата. Толерантлы булыу-булмауҙың төбөндә бер ғилләә ятыуын да шәйләмәй булмай. Һәр кем толерантлы була алмай. Күңеле керһеҙ, изгелекле, яҡты уйлы, иманлы һәм дә тәбиғәте менән юғары мәҙәниле Аллаһ балалары өсөн генә хастыр был сифат, үәт! Ахырҙа шулай тип күңелде йыуатырға ла, бөтөн был ығы-зығыға сал тарихлы милләттәргә генә хас олпатлыҡ, зирәклек, уйсанлыҡ, бөйөклөк үрҙәренән күҙ ташлап, көлөмһөрәп ҡуйырға ғына ҡала, күрәһең, халҡыма...

**Фәтих МУЛЛАҒОЛОВ.**

# ОЛОЛАР БЕЛГӘНДЕ...
## йәштәр беләме һуң?



**Ҡыҙыҡ заман килде: йәштәр - бер тормош, ололар икенсе тормош менән йәшәй кеүек. Улар бер-береһенең һүҙен ишетмәй, бер-береһенең кәңәшен тыңламай. Ололар йәштәрҙе ғәйепләй, йәштәр ҙә өлкән быуынды хурлау өсөн сәбәптәрен табып ҡына тора. Нисек килешмәк кәрәк был хәл менән...**

Бер әкиәт иҫкә төштө. Ул әкиәттең нисек аталғанын да онотҡанмын, ә эстәлеге тулыһынса иҫемдә. Бер батша ҡарттарҙы яратмаған, ти. Берҙән-бер көндө ул оло йәштәгеләрҙең барыһын да үлтереп бөтөрөргә бойорған. Батшаның уйы буйынса, ҡарттар күбәйһә, ул хәлһеҙләнә, имеш. Тик батшалыҡтағы бер генә егет үҙенең олоғайған атаһын үлемдән һаҡлап, йәшереп алып ҡалған. Көтмәгәндә илгә дошман яу аҫҡан. Батша йәш, көслө яугирҙары менән илен һаҡларға ташланған. Ҡаты алыш бик оҙаҡ дауам иткән. Дошман ғәскәренең көс йыйырға сигенгән ваҡытын файҙаланып, егет "Атайым менән хушлашайым", тип уйлап, өйөнә ҡайтып киткән. Атаһы: "Аттарығыҙҙы ла ризыҡҡа ҡулланырһығыҙ, хатта батша атына ла сират етер. Тик һин атыңдың эйәр-өпсөнөн ташлап китмә", - тигән аҡыл биргән. Егет атаһы менән хушлашып, кире яу яланына барған. Егеттең атаһы күҙаллауынса, оҙайлы һуғышта миктәгән яугирҙар аттарын ризыҡҡа ҡулланырға мәжбүр булған. Атының эйәрен, йүгәнен йөкмәп йөрөткән егеттән яуҙаштары: "Йәйәүле һалдатҡа былар нимәгә инде" , - тип көлгән. Көндәрҙән бер көндө йәйәүле ғәскәр ҙур бер яланға туҡталғанда, улар алдында күҙҙең яуын алып торған Аҡбуҙат пәйҙә булған. Батша: "Кем дә кем шул атты тотоп бирә - вәзирем булыр", - тигән. Батырҙар, сәмләнешеп, Аҡбуҙатты ҡамап ҡыуа башлаған, ләкин тота алмаған. Ә әлеге егет яурынынан эйәрен, йүгәнен ҡулына алыуы булған, Аҡбуҙат үҙе сабып килеп, баш биргән. Батшалары шулай атҡа атланған. Йәйәүле ғәскәр ары киткән. Бара торғас, бер ҙур күл янына барып сыҡҡандар. Күрәләр: саф, таҙа һыулы күл төбөндә ҙур ғына алтын йылтырап ята. "Был хәтлем ҙур алтынға тотош ғәскәргә етерлек аҙыҡ та, ҡорал да һатып алып була бит", - тип ҡыуанған батша һәм: "Кем дә кем күл төбөнән ошо алтынды алып сыға - иң яҡын баш вәзирем итермен", - тип белдергән. Батырҙар, береһен-береһе уҙҙырып, берәм-берәм күлгә сума башлаған. Тик сумған береһе тәрән күл төбөнә барып етә алмай, бата торған. Егет тағы рөхсәт һорап, атаһы менән бәхилләшергә ниәтләп, өйөнә ҡайтып киткән. Әлеге хәлде атаһына һөйләп биреп, кәңәш һораған. Ҡарт: "Ул алтын күл янында үҫкән ҡарт имән ағасының башында ята", - тигән... Күлгә сумыу сираты егеткә лә килеп еткән. Егет сумыр алдынан имән башына менеп, тыуған яғы менән бәхилләшергә рөхсәт һораған. Батша рөхсәт иткәс, киң тарбаҡлы бейек имән башына менеп, алтынды алып төшкән...

Аҙаҡ, дошманды еңгәс, батша егеттән: "Яуҙа йөрөгәндә һин аҡылың, тапҡырлығың, ауыр хәлгә ҡалғанда унан сығыу юлын таба белеүең менән башҡаларҙан айырылып торҙоң. Ҡайҙан һуң һиндә бындай аҡыл?"- тип һораған. Егет уның ҡаты хөкөмөнән йәшереп ҡалдырылған атаһы, бөтөн аҡылды ул өйрәтеүе тураһында һөйләп биргән. Шул саҡта ғына батша аҡылды оло йәштәгеләр туплай һәм һаҡлай, ә йәш быуын уны ҡулланырға, файҙаланырға тейеш икәнен аңлаған...

Ә бөгөн ололар туплаған аҡыл, тәжрибә кәрәкме йәш быуынға?..

**Фәүзиә ЯХИНА.**

*ӘЙҘӘГЕҘ...*

# БИТАРАФ БУЛМАЙЫҠ!

**Битарафлыҡ хаҡында һүҙ сыҡһа, башҡа шунда уҡ бер аҡыл эйәһенең: "Дуҫыңдан ҡурҡма - ул ни бары һине һатыр; дошманыңдан ҡурҡма - ҡурҡһаң, үлтерер; битарафтан ҡурҡ - хыянаттар ҙа, үлтерештәр ҙә тап ана шул битарафтарҙың өнһөҙ ризалығы менән башҡарыла", тигән һүҙҙәре иҫкә төшә.**

Ысынлап та, битарафлыҡтан да яман нимә бар? Уйлап ҡараһаң, битарафлыҡ - ул туң күңеллелек, күҙле көйө һуҡырлыҡ, ҡолаҡлы көйө һаңғыраулыҡ, йөрәкле көйө йөрәкһеҙлек; битарафлыҡ - ул хыянат та, тәкәбберлек тә, эгоизм да, нәфрәт тә - бер һүҙ менән әйткәндә, оло гонаһ. Битараф кеше фәҡәт үҙ донъяһына ғына бикләнеп, үҙе өсөн генә йәшәй, әгәр быны йәшәү тип әйтеп булһа... Үҙ мәнфәғәттәренән башҡа бөтөнөһөнә: башҡа кешеләргә, ата-әсәһенә, туғандарына, эшенә, сәйәсәткә, тирә-яҡ мөхиткә һ.б. битараф кешеләр ҙә була.

Беҙҙең заманда тормошобоҙҙа көн дә осрап тора битарафлыҡ күренештәре. Мәҫәлән, ҡырмыҫҡа иләүендәй ҡайнап торған ҡала урамдарында шундай хәлде йыш күрергә тура килә: һәр кем үҙ йомошо менән ҡайҙалыр ашыға, хатта тротуар ситендә йығылып ятҡан кешегә иғтибар ҙа итмәй, бер ни булмағандай, эргәһенән үтеп китәләр. Бәхеткә, бер-ике өлкәнерәк ҡатын-ҡыҙ табыла шулай ҙа. Эйелеп, ерҙә ятыусының пульсын ҡапшап, "Ашығыс ярҙам" саҡырталар. Иҫереп ҡолаған булмаһа, әлбиттә. Ә иҫерек булһа, ул кеше ята бирә. Бер яҡтан, был дөрөҫ тә һымаҡ, сөнки беҙ иҫеректәрҙе йәлләмәйбеҙ, ә уларға нәфрәтләнеп, ғәйепләп ҡарарға ғына өйрәнгәнбеҙ - сеү... был үҙе үк әлеге битарафлыҡ тураһында һөйләй түгелме? Кем әйтмешләй, иҫеректәр ҙә кемдеңдер ғәзиз балаһы, ире, ниһайәт, атаһы бит... Ҡалала иҫеректәрҙе "сүпләп", таҙартып-йыуындырып, йоҡлатып сығара торған үҙәктәр ҙә асып булашҡайнылар ҙа, тик уларҙың, исмаһам, ял йә байрам көндәре булһа ла махсус машиналарында урам буйлап рейдта йөрөгәнен күргән юҡ.

Бының менән мин, битараф булмайыҡ, тип, иҫеректәрҙе йәлләргә саҡырмайым, әлбиттә. Битараф булмаған кеше өлкән кешене юл аша сығарышып ҡуя йә транспортта уға урын бирә; икәү берәүҙе түпәләгәндә, йә булмаһа, өйәнәк тотоп йығылғанға ярҙамға ашыға... Аҙмы ни донъяның урап сыҡҡыһыҙ "урамдарында" ярҙамға мохтаждар, көсһөҙҙәр, ғәриптәр? Йәндәре ғәрип булмаған сәләмәт рухлылар ана шуларҙы хәстәрләргә әҙерме - бына нимә борсой күңелде.

**Фирүзә ИШБИРҘИНА.**

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓ Алдан алынған мәғлүмәттәр буйынса, Башҡортостанда 180 сығарылыш уҡыусыһы һынау иншаһын яҙа алманы. 3 декабрҙә республикала 21 меңдән ашыу 11 класс уҡыусыһы һынау иншаһы яҙҙы. Уның һөҙөмтәләренә ҡарап уҡыусыларға дәүләт имтиханын тапшырыуға рөхсәт биреү хәл ителәсәк. Һынауҙы тапшыра алмағандар иһә тағы ла ике тапҡыр яҙасаҡ. Резерв көндәр - 4 февраль һәм 6 май. Әгәр ҙә уҡыусы өс тапҡыр эште башҡара алмай икән, ул Берҙәм дәүләт имтиханына индерелмәй. Мәктәп тамамлаусының теләге буйынса инша һөҙөмтәләре юғары уҡыу йортона ингәндә иҫәпкә алынасаҡ. Яҡшы баһа ҡуйылған яҙма эш өсөн абитуриентҡа Берҙәм дәүләт имтиханының дөйөм балына 10-ға яҡын балл өҫтәлеүе мөмкин.

✓ Башҡортостандың кейеҙҙән тегелгән "Урал батыр" кейемдәр коллекцияһын тәҡдим иткән рәссамдар коллективы Мәскәүҙә үткән "Этно-Эрато" II Евразия юғары милли модаһы конкурсында еңеүсе булды. Республиканың төрлө район һәм ҡалаларының кейеҙ баҫыу оҫталарынан торған ижади коллектив "Иң яҡшы көнсығыш костюмы" номинацияһында еңеп сыҡты. Фестивалдә башҡорт дизайнерҙарының коллекцияһын "Һылыуҡай - Bashkirian Beauty" (етәксеһе Линара Таһирова) студияһы моделдәре күрһәтте. Халыҡ-ара жюри ҡарары буйынса, Гөлсибәр Батраева Евразия конкурсының иң яҡшы моделе тип танылды.

✓ Ял көндәрендә Башҡортостанда йәшәүселәр республикалағы һигеҙ, шулай уҡ Силәбе өлкәһендә урынлашҡан бер тау саңғыһы комплексына бара аласаҡ. Өфөлә ("Аҡ Йорт", "Олимпик-парк"), Ҡандраҡүлдә (Туймазы районы), Иглин районының Аҡбирҙе ауылында ("Ташлы", тюбинг өсөн генә трасса бар), Ишембай районының Шахтау ҡасабаһында ("Ҡуш-тау"), Мәләүез районының Һабаш ауылында ("Ергән-тау") трассалар эшләй башланы. Яҡтыкүлдә (Әбйәлил районы, "Металлург-Магнитогорск"), Абҙаҡта (Белорет районы), шулай уҡ Нуриман районының Павловка ауылынан ете километр алыҫлыҡта ("Павлов паркы") трассалар асылды. Силәбе өлкәһенең Миәс ҡалаһында "Райдер" тау саңғыһы комплексы эшләй.

✓ Рәсәй банкы 2015 йылдың июлендә Өфөлә үтәсәк Шанхай хеҙмәттәшлек ойошмаһы ағзалары булған дәүләт башлыҡтары Советы ултырышына һәм БРИКС-ҡа ингән дәүләт һәм хөкүмәт башлыҡтары осрашыуына арналған 25 һумлыҡ яңы көмөш тәңкә сығарасаҡ. 2015 йылда мең данаға яҡын тираж менән аҡса һуғыласаҡ. Ул 925 келәймәле көмөштән яһаласаҡ.

✓ *Майҙансыҡтар, боҙ ҡаласыҡтары ҡала халҡының һәм ҡунаҡтарҙың күңеленә хуш килерлек, матур итеп биҙәлгән. Тик бер нәмә генә күңелде ҡырҙы: боҙ ҡаласыҡтарында тағы ла башҡорт милли колориты онотолған булып сыҡты.*



*ЙЫЛ ЙОМҒАҒЫ*

# ИҢ МӨЛӘЙЕМ ҠАЛА - ӨФӨБӨҘ

**Өфө - Рәсәйҙә бер нисә йыл рәттән халыҡ иҫәбенең үҫеш динамикаһы билдәләнгән берҙән-бер миллионлы ҡала. Өфө халҡының иҫәбе 1 миллион 100 мең кешенән артты.**

* * *

"Баш ҡаланың башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусыһы - 2014" конкурсында Калинин районының 112-се мәктәбенән Гүзәл Ҡаһирова еңеүсе булды. "Баш ҡаланың йыл уҡытыусыһы" конкурсының "Иң яҡшы татар теле һәм әҙәбиәте уҡытыусыһы" номинацияһында уңыш Киров районының 21-се лицейы уҡытыусыһы Эльвира Ғилфановаға йылмайҙы. "Иң яҡшы рус теле уҡытыусыһы" номинацияһында һәм абсолют еңеүсе тип Орджоникидзе районының "Содружество" лицейы уҡытыусыһы Гүзәл Леонова иғлан ителде.

* * *

Интернет селтәрендә "Башҡорт теленең терминологик базаһы" барлыҡҡа килде. Уның ойоштороусылары - Рәсәй Фәндәр академияһы Өфө ғилми үҙәгенең Тарих, тел һәм әҙәбиәт институты Лингвистика һәм мәғлүмәти технологиялар лабораторияһы. Сайттың базаһында астрономия, биология, туризм, хәрби эш, география, информатика, сәнғәт, мәҙәниәт, математика, әҙәбиәт ғилеме, медицина, тел ғилеме һәм башҡа белем өлкәләре терминдары тупланған. Базаны русса-башҡортса һүҙлек кеүек ҡулланып була.

* * *

Башҡортостандың баш ҡалаһында Рәсәй тарихында тәүге тапҡыр "Сочи 2014" Паралимпия уты Эстафетаһының бер этабы уҙҙы. Рәсәй, Европа һәм донъя чемпионаттарында ҡатнашыусы һәм уларҙа призлы урындар яулаусы Юрий Акшенцов республика Президенты Рөстәм Хәмитов менән бергә ҡалала Төп утты ҡабыҙҙы.

* * *

Өфө Рәсәйҙең иң мөләйем ҡалалары исемлегенә инде. Jetpac.com порталы белгестәре махсус ҡушымта ярҙамы менән Instagram социаль селтәрендәге фотоларҙы анализлаған. Өфө 65 өйрәнелгән ҡала исемлегендә 27-се булып тора. Рәсәйҙең иң "мөләйем" ҡалаһы тип Саранск танылған. Икенсе урында - Липецк, өсөнсөлә Яр Саллы тора. Мәскәү был исемлектә 63-сө урынды биләй.

* * *

Санкт-Петербургта "Киләсәк мәктәбе: Рәсәйҙә замана мәктәбен булдырыу проблемалары һәм перспективалары" II Бөтә Рәсәй мәғариф форумы һәм "Рәсәйҙең 100 иң яҡшы мәктәбе" конкурсының финал өлөшөндә Өфөнөң 136-сы башҡорт лицейы "Иң яҡшы милли мәктәп" номинацияһы лауреаты булды, лицей директоры Шәмсулла Хабибрахманов "Йыл директоры - 2014" иҫтәлекле билдә менән бүләкләнде.

*ҮӘТ БИТ ӘЙ!*

**Иҫке йылдың һуңғы көндәрендә Өфө ҡала округы хакимиәтенең Коммуналь хужалыҡ һәм төҙөкләндереү идаралығы, Юл хәрәкәте хәүефһеҙлеге дәүләт инспекцияһы һәм Йәмәғәт хәүефһеҙлеге үҙәге вәкилдәре журналистар менән бергә ҡала урамдарын ҡарҙан таҙартыуға һәм ҡаланы төҙөкләндереү ҡағиҙәләренең үтәлешенә арналған рейд үткәрҙе.**

# ТӘРТИПҺЕҘЛЕККӘ...

## йәмәғәтселек тә күҙ йоммаһын

Рейдта ҡатнашыусылар Совет районының 14 ҡар таҙартыу техникаһының Цюрупа менән Революцион урамдарын ҡарҙан таҙартыуын күҙәтте. Бер-бер артлы теҙелеп, бесән сапҡан салғысылар һымаҡ, ҡар "сабып" барыусы ун дүрт автомобиль, ҡала буйлап ағылған транспорт ағымында оҙон йылан һымаҡ бер һуҙылды, бер ҡыҫылды, бер туҡталды, бер ҡуҙғалды. Революцион урамын таҙартыу өсөн уларға оҙаҡ ҡына тығында ла торорға тура килде. Ҡайҙалыр ашығып, махсус техниканың юлын ҡыйып, алға ынтылған алабарман водителдәр ҡар таҙартыуға бер ҡамасаулаһа, юл ситтәренә ҡуйылған машиналар - тағы бер тоткарлыҡ булып торҙо.

Бынан тыш, рейд ваҡытында үҙҙәренең ҡарамағындағы биләмәне, ишек алдын, тротуарҙарҙы таҙартмаған ҡайһы бер ойошмаларға шелтәләр яһалды, штраф һалынды. Юл таҙартыуға ҡамасаулаған тейешһеҙ урында ҡалдырылған машиналар хоҡуҡ һаҡлау органдары тарафынан эвакуацияланды. Ә журналистар иһә юлдарҙы ҡарҙан таҙартыу буйынса ниндәй ҡыйынлыҡтар барлығын үҙ күҙҙәре менән күрҙе, был турала ведомство вәкилдәре һөйләгәндәрҙе ҡағыҙға төшөрҙө.

- Дөйөм алғанда, ҡала урамдарын таҙартыу эшенә йәлеп ителгән техника һәйбәт эшләй, юл ситтәрендә ташлап ҡалдырылған техниканан башҡа, бер ни ҙә беҙҙең өсөн ҡыйынлыҡ тыуҙырмай, - тип һөйләне Өфө ҡала округының Коммуналь хужалыҡ һәм төҙөкләндереү идараһы начальнигы урынбаҫары Николай Плотников. - Шулай ҙа ҡар нығыҡ яуған көндәрҙә урам таҙартыу ҡыйынға төшә. Иғтибар иткәнһегеҙҙер - ҡар таҙартыу техникаһы, юлдарҙағы башҡа машиналар һымаҡ уҡ, дөйөм транспорт ағымы буйынса хәрәкәт итә. Юл таҙартыуҙың тиҙлеге тығындар барлыҡҡа килеүгә туранан-тура бәйле икәнлеге лә бер кемгә лә сер түгел. Беҙҙең эш һауа шарттары үҙгәреүенә ҡарап үҙгәрә. Алдағы көндәрҙә көн боҙолоуы тураһында хәбәр килһә, беҙҙең техника алдан уҡ көсәйтелгән эш режимына күсерелә. Әйткәндәй, баш ҡаланың 30 проценты тирәһе территорияһын ғына ҡарҙан һәм боҙҙан таҙартыу ҡала округы хакимиәте ҡарамағында. Ҡалған өлөш - төрлө юридик һәм физик шәхестәргә беркетелгән. Улар үҙҙәренең ойошма-предприятиеларына ҡараған территорияларҙы ҡарҙан таҙартырға, тәртиптә торорға бурыслы. Тик йыш ҡына был талап үтәлмәй һәм халыҡтың ризаһыҙлығы тап ҡала хужаларына йүнәлтелә лә ҡуя...

Ысынлап та, күпселек шәхси ойошмалар үҙҙәренең биналары эргәһендәге парковка урындарын таҙартыу һәм ҡарҙы сығарыу түгел, тротуарҙарҙы таҙартыу тураһында ла уйламай. Бик йыш улар хатта таҙартыу территорияһының бина ҡүтәрмәһенән алып юлға сыҡҡансы булыуын да белмәй. Ә халыҡҡа нимә, улар юлдар, тротуарҙар, ихаталар ҡарҙан таҙартылмаһа, әлеге лә баяғы, махсус хеҙмәттәрҙе, ҡала башлыҡтарын тәнҡитләй, әрләй, ялыуҙар яуҙырырға тотона. Ихатаһындағы ҡарҙың таҙартылмауын күргәс, был хаҡта ошо йортта урынлашҡан ойошма йә предприятие етәксеһен инеп иҫкәртеү кемдең башына етә һуң? Бәлки, тәртипһеҙлек күргәндә йәмәғәтселектең үҙенә лә битараф булмаҫҡа кәрәктер ул?

**Илгиз ИШБУЛАТОВ.**

*...ҒӘҘӘТТӘРЕ КҮРКӘМ*



# БОҘ ҠАЛАСЫҠТАРЫ САҠЫРА

**Был юлы боҙ ҡаласыҡтары баш ҡаланың егерменән ашыу майҙансығында, ҙур сауҙа, мәҙәниәт, спорт үҙәктәре алдында ҡалҡып сыҡты. Яңы йыл алдынан баш ҡала округы хакимиәтенең эшсе төркөмө һәм журналистар ошо боҙ ҡаласыҡтарына рейд яһаны.**

Иң ҙур ҡаласыҡ ҡала округы хакимиәте алдындағы В. И. Ленин исемендәге майҙанда төҙөлгән. Бында традицион рәүештә ике ҙур тау, боҙ һындар, мәктәп йәшенә тиклемге балалар өсөн майҙансыҡтар ҡуйылған. Быйыл бындағы туҡланыу нөктәләре ағас буранан эшләнгән киоскыларҙа урынлашҡан. Уларҙа Башҡортостанда етештерелгән аҙыҡ-түлеккә өҫтөнлөк бирергә вәғәҙә итәләр. Өфө Балалар филармонияһы алдындағы майҙансыҡта боҙҙан 13 скульптура - рус халыҡ әкиәттәре һәм башҡорт эпостары геройҙары ҡуйылған, ике тау өйөлгән. Яңы йыл каникулдары мәлендә боҙ ҡаласығы янында көн һайын үҫмерҙәр клубтары тарафынан төрлө тамашалар, саралар ойоштороласаҡ.

Һәр боҙ майҙансығына авторҙар үҙ идеяһын, үҙенсәлеген бирергә тырышҡан. Мәҫәлән, "Өфө-Арена" алдындағы майҙан спорт тематикаһына ярашлы эшләнгән. Билдәле совет мультфильмдары сюжеттарына ҡоролған майҙан бәләкәйҙәрҙең дә, ололарҙың да күңеленә хуш киләсәк, әлбиттә. Дим районындағы боҙ композицияһы "Кәзәлә ҡунаҡта" тип атала. Ҡунаҡтарҙы йыл хужаһы - кәзә, рус халыҡ әкиәттәренең һәм мәҫәлдәренең геройҙары ҡаршы ала. Спорт һарайы алдындағы боҙ ҡаласығы "Мәҙәниәт йылынан - Әҙәбиәт йылына" тип атала. Шуға ла бында Пушкин, Ершов, Толстойҙың бәләкәйҙәр өсөн әҫәрҙәренең һәм "Бүре һәм ете кәзә бәрәсе" кеүек урыҫ халыҡ әкиәттәренең геройҙары ҡаршы ала. Затон микрорайонында боҙ ҡаласығы шулай уҡ Әҙәбиәт йылына арнала. Боҙ ҡаласығы "Уҡыусы иле" тигән атама алған.

Был юлы боҙ ҡаласыҡтарында балаларҙың именлеген һаҡлау мәсьәләһенә төп иғтибар биреләсәк, тинеләр. Был ҡағиҙәнең теүәл үтәлеше буйынса махсус комиссиялар эшләйәсәк, рейдтар ойоштороласаҡ.

**ӘЙТКӘНДӘЙ...**

**Майҙансыҡтар, боҙ ҡаласыҡтары ҡала халҡының һәм ҡунаҡтарҙың күңеленә хуш килерлек, матур итеп биҙәлгән. Тик бер нәмә генә күңелде ҡырҙы: боҙ ҡаласыҡтарында тағы ла башҡорт милли колориты онотолған булып сыҡты. Ҡаласыҡтарҙы асыу тантаналарында рус, белорус, хатта сит илдәр тамашалары күрһәтелеп тә, башҡорт компонентына урын бирелмәүе сәйер тойолдо. Быны, моғайын, Башҡортостандың баш ҡалаһына килеп, республикаға исем биргән халыҡтың мәҙәниәте сағылышын күрергә өмөтләнгән ҡунаҡтар ҙа шәйләгәндер.**

**Арыҫлан ИСКӘНДӘРОВ.**

## Б А Ш Ҡ А Л А Х Ә Б Ә Р Ҙ Ә Р Е

✓Энергия һатыу компанияһынан хәбәр итеүҙәренсә, 2015 йылдың ғинуарында электр энергияһына тарифтар үҙгәрешһеҙ ҡаласаҡ. Башҡортостан Республикаһы Тарифтар буйынса дәүләт комитетының шуға ярашлы ҡарары киләһе йылдың 1 ғинуарынан үҙ көсөнә инә. Әммә 2015 йылдың икенсе ярты йыллығында тарифтарҙың артыуы күҙаллана. Атап әйткәндә, электр плитаһы булмаған өйҙәрҙә йәшәүсе ҡала кешеләре электр энергияһы өсөн 20 тингә артығыраҡ түләйәсәк. Хаҡы - 2,55 һум, ә электр плитаһы ҡуйылған йорттарҙа түләүҙәр 14 тингә артасаҡ һәм 1,79 һум тәшкил итәсәк. Ауыл ерендәгеләр өсөн тариф шулай уҡ 14 тингә күтәреләсәк һәм 1,79 һум тәшкил итәсәк.

✓Башҡортостан "Һатып алыуҙар асыҡлығы буйынса милли рейтинг-2014" проекты һөҙөмтәләре буйынса "гарантияланған асыҡлыҡ" категорияһында юғары балл йыйған төбәк лидерҙары иҫәбенә инә, тип хәбәр иттеләр республиканың Дәүләт заказдарын урынлаштырыу буйынса дәүләт комитетының матбуғат хеҙмәтенән. Рейтинг лидерҙары асыҡ һәм һөҙөмтәле эшләй, уларҙың эшмәкәрлеге конкуренция кимәленең юғары булыуы һәм мәғлүмәт асыҡлығы менән айырылып тора, тип аңлатма бирҙеләр проекттың ойоштороу комитетында.

✓"500 ферма" программаһын ғәмәлгә ашырыу осоронда уға 200-ҙән ашыу һөтсөлөк-тауар хужалығы ҡушылған. Башҡортостандың ауыл хужалығы министры Николай Коваленконың һүҙҙәренсә, ошо ваҡыт эсендә 304 малсылыҡ бинаһы, 34 силос-сенаж ҡоролмалары яңыртылған һәм төҙөлгән, 5,5 мең тоҡом малы һатып алынған. Дәүләт ярҙамына 1,3 миллиард һум йүнәлтелгән. 2015 йылда программаны тормошҡа ашырыу дауам итәсәк. Николай Коваленко әйтеүенсә, унда 57 предприятие ҡатнашырға иҫәп тота.

✓Учалы сәнғәт һәм мәҙәниәт колледжына ваҡытһыҙ донъя ҡуйған башҡорт композиторы Салауат Низаметдиновтың исеме бирелде. Учалы сәнғәт колледжы 1972 йылда асылған. Дүрт тиҫтә йыл эсендә уҡыу йорто 2000 белгес әҙерләп сығарған, улар республикала һәм унан ситтә эшләй. Колледжда музыканттар, рәссамдар, профессиональ һәм үҙешмәкәр бейеү һәм театр коллективтары, концерт ойошмалары, студия етәкселәре, уҡытыусылар әҙерләнә.

ФЕНОЛОГ ЯҘМАЛАРЫ

# ҺАРЫҠ ҠОРО ЯРАТА...

**Көнсығыш календары - башҡорттоң календары түгел инде, шулай булыуға ҡарамаҫтан, беҙҙең халыҡ уны күптән ҡабул итеп алған: "Барыҫ йылы - барын сәс, һис юғында тары сәс", йәғни барыбер уңыш була, тигән. Ә йылҡы йылы менән һарыҡ, йәғни ҡуй йылдары, гәҙәттә, ҡоро була.**

Мин етмешенсе йылдарҙан алып һауа торошо күрһәткестәрен теркәп барам. Ҡуй йылын "уртаса йыл" тип баһалағанмын. Мин тағы бер календарь буйынса күҙәтеү алып барам. Уныһы - астрологтар календары. Юпитер йылында ла әллә ни ҙур уңыш алынмаған. Был календарь ете циклдан тора. Улар Ай, Сатурн, Юпитер, Марс, Ҡояш, Венера, Меркурий йылдары. Астрологтар календары буйынса, 2015 йыл - Юпитер йылы. Юпитер йылдары бик үк шәптән булмаған. Уңышты Юпитер йылдарына ҡараған 1994, 2001 йылдарҙа алғанбыҙ ул, тик 2008 йыл был йәһәттән насар килгән. Шуға, йыл ҡоро килер, тигәнерәк фараз бар.

Ҡоролоҡтан артыҡ һаҡланып та булмай инде, тәбиғәт бит. Шулай ҙа гәзит уҡыусыларҙың ҡайһы берә минең һүҙҙәр менән килешмәүе лә мөмкин. Ни өсөн тигәндә, минең күҙәтеүҙәрем бары үҙебеҙҙең яҡ - Урал алды райондарына ғына хас. Мәҫәлән, Башҡортостандың төньяҡ-көнсығышындағы Мәсетле, Дыуан яҡтарында бер ваҡытта ла ҡоролоҡ булмай. Барыһы ла зонаға бәйле. Дүртөйлө, Илеш яҡтарында ла беҙҙең яҡтағы һымаҡ ҡоролоҡ булмай. Сөнки Ағиҙел, Кама һыуһаҡлағыстары йылғалары барыбер микроклимат барлыҡҡа килтерә. Урал алды районлары - Мәләүез, Күгәрсен, Ейәнсура районлары менән Урал аръяғы районлары ҡоролоҡҡа йыш дусар була. Әлбиттә, беҙҙең яҡтарҙа ла шул уҡ быуалар, һыуһаҡлағыстар булыуы аҙмы-күпме микроклимат тыуҙыра. Күгәрсен районындағы Йомағужа һыуһаҡлағысы, Хәйбулла районындағы бер нисә быуа, Баймаҡ районындағы һыуһаҡлағыстар, күлдәр тураһында әйтәм...

Беҙҙең яҡтағы ҡоролоҡто ғалимдар күрше Ҡаҙағстандың Арал күленең һайығыуы менән бәйләй. Улар хаҡлы ла, минеңсә. Көньяҡтан хәҙер ҡоро ел иҫә. Ҡаҙағстан тигәндәй, хәҙер улар ҙа ҡуй көтмәй башланы, шуға беҙҙең яҡтарға саранчалар күпләп килеүе күҙәтелә. Саранча менән һарыҡ көтөүе араһында ниндәй бәйләнеш бар, тиһегеҙме? Саранчалар йомортҡаны үлән һабағына перпендикуляр итеп һала. Әгәр саранча йомортҡа һалған яландан һарыҡ өйөрҙәре үтһә, йомортҡалар зыян күреп, ҡоротҡостар 20-30 процентҡа аҙыраҡ үрсей. Хәҙер беҙҙә лә элекке һөрөнтө ерҙәрҙә һүтлы-һүтлы булғас, әрем һымаҡ ҡый үләндәре үҫә, уларҙы саранчалар яратып ашай һәм йомортҡаһын һалып китә. Ҡоротҡос бөжәктәр ныҡлап баш ҡалҡытһа, самолет менән ағыулай башлайҙар. Тик ағыуҙың кеше, мал-тыуар, ҡырағай йәнлек-ҡоштар өсөн зыяны да хәтерҙән сығарырға ярамай. Элек саранчалар тураһында егерме йылға бер мәртәбә ишетһәк, хәҙер йыл һайын тиерлек ишетелә.

**ЙОМҒАҠЛАП...**

**2014 йыл ҡоро килде. Йәй һыуыҡ булды. Һыуытҡанға күрә, исмаһам, ямғыры яуһа икән. Уныһы ла булманы. Былай шөкөр инде. Былтыр үҙебеҙ сәскән йөҙөм емеш бирҙе, аҙыраҡ бал да булды. Быйыл да йыл, былтырғыса, ҡоро килер, самаһы. Һарыҡ ҡоро ярата бит...**

**Зиннур КҮСӘРБАЕВ,**
**хаҡлы ялдағы агроном.**
**Ейәнсура районы**
**Иҫәнғол ауылы.**

ӘЙҘӘГЕҘ...

# ИҪКӘ ТӨШӨРӘЙЕК!

**"Әсәйем лөғәте" рубрикаһында "Йәшәнкә лә сана..." тигән мәҡәлә баҫылып сыҡҡайны. Шуны уҡығас, мин дә бер фекерем менән уртаҡлашмаҡсы булдым әле.**

Эйе, һуңғы ваҡытта беҙ ата-бабаларыбыҙҙың көнкүрешендә ҡулланылған әйберҙәрҙең атамаларын онотоп бөтөп барабыҙ, шикелле. Әле яңы ғына арба, сана һәм һыу тирмәне беҙҙең йәшәү сығанағы булып тора ине, бөгөн улар ҙа көнкүрештә ҡулланылыштан бөтөнләй китте.

Мин үҙем 1947 йылда 16 йәшемдә колхозда тәгәрмәс һуға башланым. Гәзиткә беҙҙең яҡтарҙа ҡулланылған арба өлөштәренең исемен яҙып, уның һыҙмаһын ебәрәм. Тик ҡайһы бер өлөштәрҙең исемдәре онотолған, хатта ауыл ҡарттары ла иҫтәренә төшөрә алманы. Бәлки, уларҙы гәзит уҡыусылар араһында белгәндәр барҙыр?

Бөтөнләй онотолоп бөтмәҫ элек, белгән кешеләр гәзит биттәрендә һыу тирмәненең төҙөлөшө тураһында ла яҙып ебәрһә, шәп булыр ине.




**Ҡасим ЯНБАЕВ.**
**Ейәнсура районы.**

ЙЫЛ ЙОМҒАҒЫ

# ИҢ МӨЛӘЙЕМ ҠАЛА - ӨФӨБӨҘ

* * *

Июль һуңында Швейцарияның Лозанна ҡалаһында Башҡортостан делегацияһы 2021 йылда үтәсәк XI Бөтөн донъя уйындарын үткәреү хоҡуғына эйә булыу өсөн үҙенең ғаризаһын презентацияланы. Унда Өфөнән башҡа Перуның баш ҡалаһы Лима һәм Американың Алабама штатындағы Бирмингем ҡалаһы ла үҙенең ғаризаларын тәҡдим итте.

* * *

Өфө Рәсәйҙең иң оптимистик ҡалалары рейтингында лидерҙар иҫәбенә инде. Был хаҡта "Росгосстрах" Стратегик тикшеренеүҙәр үҙәге төҙөгән мәғлүмәттәр хәбәр итә. Өфөләрҙең 85 проценты үҙ тормошо менән ҡәнәғәт булыуын һәм 68 проценты иртәгәгә көнгә ышаныс менән йәшәүе тураһында белдергән. Иң пессимистик ҡалалар иҫәбендә - Омск, Волгоград һәм Барнаул.

* * *

Өфө йыл һайын үткәрелгән "Башҡортостан Республикаһының иң яҡшы муниципаль берәмеге" конкурсы еңеүсеһе булды. Баш ҡалабыҙ унда конкурстың өс йүнәлешендә: "Иң яҡшы ҡала округы", "Ҡала округының иң яҡшы муниципаль хеҙмәткәре", "Иң яҡшы рәсми сайт" номинацияларында алдынғы урынды бирмәне.

* * *

Илдең 87 иң эре ҡалаһы араһында барған экологик рейтингта Өфө иң юғары баҫҡысҡа күтәрелде. Унан артынан Саранск, Вологда, Мәскәү һәм Воронеж тора. Атап үтелгән мегаполистарҙың барыһында ла тиерлек атмосфера һауаһы һәм һыу ҡулланыу, транспорт, ҡала территорияларын файҙаланыу, энергияны ҡулланыу буйынса имен хәл-торош күҙәтелә. Рейтинг халыҡ-ара практикала ҡулланылған һәм Рәсәй шарттарын иҫәпкә алып аныҡланған күрһәткестәргә ярашлы төҙөлгән.

* * *

Башҡортостандың баш ҡалаһы "Төрлө балалар мөһим" Бөтә Рәсәй конкурсында ҡатнашыусы ҡалалар рейтингында, беренселекте Ступино ҡалаһына биреп, икенсе урын яуланы. Конкурста Рәсәй Федерацияһының 53 субъектынан йөмғеһе 160-тан ашыу ҡала ҡатнаша. Башҡортостан ҡатнашыусы ҡалалар иҫәбе буйынса лидерлыҡ итә. Исемлеккә республиканың туғыҙ ҡалаһы инә: Өфө, Туймазы, Күмертау, Ағиҙел, Салауат, Стәрлетамаҡ, Дүртөйлө, Благовещен һәм Мәләүез.

* * *

Өфө "Урбаника" Территориаль планлаштырыу институты үткәргән Рәсәйҙең йөҙ эре ҡалаһы интеграль рейтингында һигеҙенсе урынға күтәрелде. Тикшеренеүҙең маҡсаты - эре ҡалаларҙағы тормоштоң "хаҡы" менән "сифаты" күрһәткестәренең нисбәтен сағыштырыу. Рейтингтың тәүге тиҫтәһенә шулай уҡ Нижневартовск, Төмән, Сочи, Екатеринбург, Краснодар, Көньяҡ Сахалинск, Белгород ингән. Мәскәү - 25-се, Санкт-Петербург - 20-се, Силәбе 39-сы урында. Лидер итеп Сургут ҡалаһы танылған.

## Х А Л Ы Ҡ Д А У А Һ Ы



**Был рубрикала баҫылған кәңәштәрҙе ҡулланыр алдынан мотлаҡ табип менән һөйләшергә, анығ диагноз ҡуйырға, үләндәргә аллергия юҡлығын тикшерергә кәрәклекте онотмағыҙ.**

### Ауырыуҙан һаҡланыу өсөн...

❖ Ҡыш урамға сыҡыр алдынан танау ҡыуышлығына оксолин майы, балалар кремы йә булмаһа көнбағыш майы һөртеп сығығыҙ.

❖ Ҡулъяулыҡҡа аҡ шыршы (пихта), лаванда йәки әрем майы һөртөргә һәм ваҡыты-ваҡыты менән уны танауға һәм ауыҙға ҡуйып, ошо ҡулъяулыҡ аша тын алырға. Был ысулды айырыуса йәмәғәт транспортында ҡулланыу яҡшы.

❖ Йәмәғәт транспортында саҡта ауыҙға 1-2 бөртөк ҡәнәфер, лимон ҡабығы ҡабырға була. Был продукттарҙағы фитонцидтар вирустарҙы юҡҡа сығарасаҡ.

❖ Миҙгел ауырыуҙары көсәйгән саҡта һөттән һәм һөт ризыҡтарынан баш тартығыҙ. Һәр иртә әфлисун, грейпфрут һуты эсегеҙ, кисен һуған, һарымһаҡлы салат ашағыҙ.

### Аҡ фасоль

❖ Ҡайһы саҡта бәрелгән урын оҙаҡ ауырта. Бындай саҡта ярты кг аҡ фасолде бешереп, иҙергә лә, һыуына башлағас, ауыртҡан урынға һалып, кизе-мамыҡ сепрәк менән бәйләргә. Өҫтөнән йылы шарф бәйләргә була. Компресс төнгөләккә эшләнә.

### Фибриома

❖ Был мәкерле сирҙе халыҡ ысулы менән дауаларға була. Киптерелгән 4 ҡалаҡ ҡайын бөрөһөн термосҡа һалырға, 2,5 стакан бер аҙ йылытылған 90 процентлы спирт (спиртты утта йылытырға ярамай, уны һауыты менән йылы һыуға тығып алығыҙ) ҡойорға. 3 тәүлек төнәткәс, һөҙөргә. Үҫеп ултырған алоэ гөләнән ҙур ғына бер япраҡты ҡырҡып алырға, таҙа сепрәк менән һөртөргә (йыуырға ярамай), ит турағыстан үткәрергә, 4 ҡалаҡ шыйыҡ бал өҫтәргә һәм ҡайын бөрөһө төнәтмәһенә ҡушырға. Көнөнә 3 тапҡыр, ашарҙан 20 минут алда 1-әр ҡалаҡ ашарға. Ҡулланыр алдынан яҡшылап болғатырға. Дауаны көсәйтеү өсөн иртән төнәтмәгә сей йомортҡа, көндөҙ һәм кисен 1 ҡалаҡ аҡ май менән ҡушып ашарға була.

**Айбикә ЯҠУПОВА.**

ЙОЛАЛАРЫБЫҘ



# ҠАШҠАР...
## тимәк, бүре

**Ҡайһы бер тикшеренеүселәр фекеренсә, эт культы нигеҙендә бүрене изгеләштереү ята. Лингвистар хатта төрки телдәрендәге "it" менән "kurt" бер үк терминдың төрлө варианттары, тип иçәпләй.**

Башҡорттар араһында эткә Ҡашҡар тигән исем биреү киң таралған. Сыуаштарҙа, ҡаҙаҡтарҙа, ҡырғыҙҙарҙа, ҡарағалпаҡтарҙа, үзбәктәрҙә "ҡашҡар" һүҙе "бүре" тигәнде аңлата. Пермь һәм Силәбе башҡорттары ла бүрене ҡашҡар тип йөрөтә. Башҡорт һәм ҡырғыҙ телдәрендәге "эт-ҡош" тигән йыйылма һүҙ бар, бында ла "эт" бүрене белдерә. Эт - ул ҡулға эйәләштерелгән бүре, тигән фекерҙе күҙ уңында тотһаң, бүре йорт хайуанына әүерелгәс тә, табыныу объекты булыуҙан туҡтамай, боронғо кешеләрҙең дини-мифологик системаһында шул уҡ ролде башҡара. Әммә шул ваҡытта эйәләштерелгән бүре культы эт культы формаһында айырым үçешә башлай.

Башҡорт фольклорында эттең кешегә, ә кешенең эткә әйләнеү күренешен һүрәтләгән урындар йыш осрай. "Иҙеүкәй менән Мораҙым" эпосында, "Йылан батыр", "Буҙ көсөк" әкиәттәрендә быны күрергә була. Ҡурған башҡорттарының бер әкиәт-легендаһында Нух исемле ҡарттың өс ҡыҙының береһе эткә әйләнә ала. Боронғо башҡорттарҙың эт менән кешенең берҙәйлеге телдә сағылыш алған, мәçәлән, көсөк тип эттең балаһын да, бәләкәс балаларҙы ла әйтеүҙәре мөмкин. Йыраҡ юлға сыҡҡанда хәйерҙе өлкән кешегә лә, эткә лә бирергә ярай. Ҡайһы бер халыҡтарҙа үҙенә ҡул һалғандарҙың, яуыздарҙың йәне эткә йәки бесәйгә әйләнә тигән ышаныу бар. Башҡорттарҙың дауалау магияһында ла эт йәндең һынланышы йәки йәнгә урын сифатында ҡулланылыуы сағылып ҡалған. Өсйән (рахит) менән ауырыған баланың йәне өсәү - береһе - кеше, икеһе эт йәне, тигәндәр. Был сирҙе дауалағанда имселәр шула тип ҡысҡырған: "Эт йәне, сыҡ; кеше йәне, ҡал!" Бала нимәнәндер ныҡ ҡурҡып, ауырыһа, ҡото осҡан, тиҙәр. Йәнде кире тәнгә ҡайтарыу маҡсатында ҡот ҡойола.

Кеше үлгән саҡта уның йәне эткә урынлаша, тигән ышаныу бар. "Ихатала эт олоуы - мәрхүмдең ожмахҡа ауыр юлы тураһында һөйләр", тиҙәр, эт уны ожмахҡа оҙатып бара һәм уның юлында осраған яуыз көстәр менән көрәшә, тигәндәр. Йолаларҙа эт һаҡлаусы һәм йән биреүсе булып та тора. Яңы тыуған баланы эттең аçтынан үткәреү уны үлемдән һаҡлай. Әгәр ҙә ике-өс йәшкә тиклем атламаһа, балаға ауырлы саҡта ҡатын кеше эткә типкән, тиҙәр. Шуның өсөн дә баланы эттең аçтынан үткәргәндән һуң уны көсөктө аша атлаталар, һуңынан көсөк баланы аша атларға тейеш. Ышаныуҙар буйынса, дүрт күҙле, йәғни, күҙҙәре өçтөндә ҡара таплы эттәр яуыз көстәрҙе, ауырыуҙарҙы күрә һәм уларҙы ҡыуа.

Ғаиләлә балалар тормаһа, яңы тыуған сабыйға эт күлдәге тегеп кейҙерәләр. Был күлдәктең еңе, сите тегелмәй һәм уны тәүҙә эткә, һуңынан балаға кейҙерәләр, исеме лә шунан килеп сыҡҡан. Эт күлдәген баланың атаһының йәки әсәһенең күлдәгенән тегеү яҡшыраҡ. Күлдәкте кейҙергәндә: "Эт ғүмерле булһын, ауырыуын эт алып китһен", - тип теләк теләйҙәр. Бала был күлдәкте бер аҙна, ун йәки ҡырҡ көн кейә. Һуңынан баланың һаулығын теләп, уны эткә кейҙереп йәки муйынына бәйләп ебәрәләр. Эт ул күлдәкте өҙгөләп бөткәнсе кейеп йөрөй.

**Ф. Илембәтов, А. Илембәтова.**
**"Башҡорт мифтары һәм йолаларында хайуандар культы" китабынан.**
**(Дауамы бар).**

ӘЙҘӘГЕҘ...

# АÇАЛЫ БАЛАÇ ҺУҒАЙЫҠ!

**Миәкә районында үткән "Аҡмулла нәсихәттәре" республика фольклор байрамы барышында район мәҙәниәт йорто фойеһында оçтабикәләр араһында "Күҙ теймәһен ҡулыңа!", ә маһир ир-егеттәрҙең "Беләгеңә көс-ҡеүәт!" тип аталған күргәҙмәләрендә барыһы 30 кеше ҡатнашты. Башҡорт халҡының ижади маһирлығын ауылдарҙа, оло йәштәге инәйҙәр менән аралашҡанда күреп булыуына тағы бер ҡат инандырҙы был сара.**



Бөгөн баҙарҙа йәнең теләгән нәмәне зауығыңа ҡарап һайлап алырға мөмкин булған заманда күптәр ыҙалап, күҙ нурын ҡалдырып, ҡул эштәре менән булышып ултырырға теләмәй. Йәштәр үҙҙәре тегеп, бәйләп, сигеп ултырғансы, бөтә кәрәкле әйберҙе һатып алыуҙы хуп күрә. Ә бына оло быуын кешеләре ғүмер буйына яратып тотҡан шөғөлдәрен ташларға ашыҡмай. Шундай оçтабикәләрҙең береһе, Миәкә районы Ҡолтайҡаран ауылынан Зөбәржәт Йәнекәйеваның һуғылған аçалы балаçтар тураһында һөйләгәндәре үтә фәһемле тойолдо.

- Миңә күп йәштәштәрем кеүек үк мәктәптә оҙаҡ белем алыу эләкмәне, һигеҙенсе синыфты тамамлағас та эшкә сығырға тура килде, - ти Зөбәржәт апай. - Шуға күрә, ун алты йәшемдән алып балаç һуғам, әле лә яратҡан шөғөлөмдән айырылғаным юҡ, тип әйтер инем, быйыл ҡышҡыһын ғына туҡтап торҙом. Юғиһә, быға тиклем йылына дүртәр балаç һуғып һата инем. Башҡорт балаçтары биҙәктәренең төрлөлөгө, сағыу төçтәр ҡулланып эшләнеүе менән күҙҙең яуын алып тора. Мин был күргәҙмәгә алып килгән алты балаçыма сәскә биҙәге, батмус аçаһы, төшөргәнмен, ҡалған оçтабикәләр япраҡлы батмус, самауыр тояғы, ромб формаһындағы биҙәктәр һалып һуҡҡандар. Әле ҡарап торам да, һарыҡ йөнөн буяп, аçалы балаç һуғыусылар әле лә районыбыҙҙа күп икән, тигән фекергә киләм. Әҙер иләнгән ептәрҙән һуғылған балаçтарҙың сифаты ҡайтыш булыуын яҡшы белгән оçтабикәләр, ни тиклем генә ауыр булмаһын, элекке традицион ысулдарҙы ҡулланып эшләүен дауам итә.

Был һөнәргә мин күрше әбейҙән өйрәнеп ҡалғайным, Өфөлә йәшәүсе Зөһрә ҡыҙыма бар оçталығымды тапшырырға тырыштым. Хәҙер ул минең эшемде дауам итә - аçалы балаçтар һуға, дебет шәлдәр бәйләй, Аллаға шөкөр. Ауылдағы ҡатын-ҡыҙҙар борондан килгән шөғөлөбөҙҙө өйрәнеп ҡалырға бик үк теләк белдереп бармай. Беҙҙең быуынға инде заманаһы шулай тура килеп, әйберҙе баҙарҙан алыр урынға, үҙебеҙ яйын күреп эшләргә өйрәнеп, шуларҙы һатып, балаларҙы ҡарарға, уҡытырға аҡса таба инек. Мин был аçалы балаçтарҙан тыш, дебет шәл дә бәйләргә, сигеү сигергә лә, кейем тегергә лә маһир булдым. Тик, ҡыҙғанысҡа күрә, сүпләм эшләргә генә өйрәнмәнем. Сүпләмде лә балаç һуғыу станогы ярҙамында эшләгәндәр борон, бер-нисә өлгөһө һаҡланып ҡалһа ла, уны һуға белеүселәр юҡ. Ҡиммәтле һәм зауыҡлы заманса балаçтарҙы һатып ҡына алабыҙ, тигән фекерҙә булған йәштәрҙе нисек тә булһа был уйҙарынан баш тарттырырға ине. Оçталыҡ ҡандан бирелһә лә, ҡул эштәре менән булышырға теләмәгән милләттәштәр киләсәктә маһирлығын юғалтып, ошоноң кеүек боронғо шөғөлдәрҙең серҙәрен онотоп бөтөп ҡуймаһын ине...

**Сәриә ҒАРИПОВА.**

ӘЙҘӘГЕҘ...

# ҠУЛЫМА ТАҒЫ БЕР ЭШ ТАПТЫМ

**Замана талабы шундай бөгөн - һәр кем төп эш урынынан тыш ниндәй ҙә булһа өçтәлмә килем алыу юлын эҙләй. Кемдер икенсе, өсөнсө, хатта дүртенсе эшкә урынлашып, көнө буйы ат һымаҡ саба, икенселәр яратҡан шөғөлөнән килем алыу яйын таба. Мине лә был мәсьәлә урап үтмәне, эш хаҡым айҙан-айға көндө көнгә ялғап йәшәргә етһә лә, бер ҡасан да артыҡ аҡсам булманы. Һатыусы булып эшләгәс, бер-нисә урында эшләү минең өсөн түгел, сөнки иртә таңдан ҡара кискә тиклем прилавка артында тороп, эт кеүек арып ҡайтып йығылам. Аҡса килтерерлек шөғөлдәрем дә юҡ бит, исмаһам, тип, үҙемә йәнем дә көйөп китә ине ҡайһы саҡта. Ләкин юлын таптым барыбер - ял ваҡытында йүгереп йөрөп массаж эшләйем. Гәзит уҡыусыларҙы ла минең сафты тулыландырырға саҡырам.**

Бөгөнгө көндә массаж - ҙур һорау менән файҙаланған хеҙмәт. Берәүҙәр массаж эшләүсегә ниндәйҙер етди ауырыу һөҙөмтәһендә мөрәжәғәт итһә, икенселәр ауыр эштән һуң тәндәрен яҙыу өсөн йәки һаулыҡтарын хәстәрләп, ошо хеҙмәт менән файҙалана. Ләкин шуныһы факт - һәйбәт белгес клиентһыҙ тормай. Һәм иң мөһиме, массаж серҙәренә теләгән һәр кем өйрәнә ала. Бының өсөн төрлө курстар бихисап, уҡырға йөрөргә ваҡытың булһын да түләргә аҡсаң ғына табылһын. Мин дә аҡсаны ҡыçып-һығып түләп, махсус курста уҡып сыҡтым. Ләкин был ғына әҙ, артабан тәжрибә туплау мөһим. Бының өсөн мин өйҙәгеләрҙе "тотондом" - һәр кис алмашлап, йә иремдә, йә улымда өйрәнгән алымдарҙы камиллаштырҙым. Тәүҙәрәк "ҡулың ҡаты", "дөрөç эшләмәйһең", "тәнде күгәртәһең" тип мыжыған иптәштәр тора-бара үҙҙәре үк массаж эшләүемде һорай башланы. Уларҙың артымдан ҡалмай йөрөүе оçталығымды артабан үçтерергә ваҡыт еткәнлегенә ишара булды. Тәүҙә хеҙмәтемде бергә эшләгән иптәштәремә тәҡдим иттем - барыһы ла ҡәнәғәт ҡалды. Унан инде сират һеңле һәм ҡустыларға етте. Артабан "сарафан" радиоһы үҙенекен эшләне - клиенттар үҙҙәре шылтырата башланы. Һәр кемгә иғтибарлы булыуым һәм эшемә илке-һалҡы ҡарамауым уларҙың һанын көндән-көн арттыра.

Ҡайһы бер ауырыуҙар өсөн массаж зарарлы, шуға күрә бик һаҡ булырға кәрәк. Ғөмүмән, дауалаусы массаж бик нескә өлкә һәм махсус медицина белеме булмаған кешегә сирлеләрҙең һаулығын ҡурҡыныс аçтына ҡуймау хәйерле. Мин, мәçәлән, медицина белемем булмау сәбәпле, дауалау массажы эшләмәйем, ә бөтөн тәнгә һәм арҡаға ғына эшләнгән классик массажға өçтөнлөк бирәм. Тәүгеһендә бер сәғәтлек курс өсөн 600 һум, ә икенсеһендә 400 һум алам. Ҡалала бындай хеҙмәт күрһәтеүсе махсус салондар ҙа, айырым кешеләр ҙә бихисап, шуға күрә конкурентлыҡ һаҙлығында батып ҡалмаç өсөн хаҡты арзанyраҡ ҡуям. Аҙнаһына, кәмендә, өс-дүрт сеанс эшләйем һәм алған килемем миңә етә - артығы кәрәкмәй. Ә шул уҡ ваҡытта сығымдар юҡ тиһәң дә була - аҡса юлға һәм белемде камиллаштырыу өсөн һатып алынған махсус әҙәбиәт өсөн генә кәрәк.

Шулай итеп, ҡулдарымдан файҙа күрәм. Әлбиттә, өйрәнеп киткәнсе ауыр булды - ҡулдар ҙа тиҙ арыны, хәл дә бөтә ине. Хәҙер иһә бер ҡыйынлығын да күрмәйем - был шөғөлөм миңә төрлө кеше менән аралашыу мөмкинлеге лә бирә, кеçәмде лә ҡалынайта.

**Гөлшат ИСКӘНДӘРОВА.**

*✓ Миңзәлә, Бөгөлмә, Елабуға, Сарапул өйәҙҙәренең көньяғында башҡорт ауылдарының күпселектә булыуын теркәй. Улар араһында башҡорт-типтәр, типтәр-мишәр ауылдары булһа ла, башҡорттар һан яғынан өҫтөнлөк итә.*



*ТАРИХИ ХӘҠИҠӘТ*

**"Башҡорт ырыуҙары тарихы" серияһының тәүге томдары сыға башлауы тураһында хәбәр иткәйнек инде. Бөтә башҡорт ырыуҙарын да үҙ эсенә аласаҡ күләмле хеҙмәттең йәнәй, балыҡсы, гәрәй (кирәй, гирей), унлар ырыуҙарына ҡараған дүрт томы сыҡты ла инде, яҡын арала ҡаңлы ырыуына арналған томдың тиражы әҙер буласаҡ. Салауат Хәмиҙуллин, Юлдаш Йосопов, Рәфил Аҫылғужин, Рөстәм Шәйхиев, Радик Рыҫҡолов, Айгөл Ғүмәрова һәм башҡаларҙан торған авторҙар коллективының хеҙмәте халыҡта лайыҡлы баһаһын табып, күптәргә үҙ тамырҙарын белергә тырышыуға, өйрәнә башлауға, аңлауға һәм таныуға этәргес булыр, тип ышанып ҡалабыҙ. Тарих фәндәре кандидаты, Башҡортостан юлдаш телеканалының билдәле журналисы Салауат ХӘМИҘУЛЛИНдың "Башҡорт ырыуҙары тарихы" серияһы, халҡыбыҙ тарихының ҡайһы бер биттәре тураһындағы яҙмаларын дауам итәбеҙ.**



# ҠАН БУЙЫНСА БАШҠОРТТАР...

## тамырҙарын иҫкә төшөрһөн

### Башҡорттар тураһында яҙмалар

Йәнәй ырыуы башҡорттарының, шулай уҡ тарихи Башҡортостандың төньяҡ-көнбайышында йәшәгән башҡа ырыу башҡорттарының татарлашыуы, милли үҙенсәлектәрен, тамырҙарын онотоуы хаҡында яҙғанда, ҡайһы бер нәмәләрҙе аңлатып китергә кәрәк буласаҡ.

Башҡорт этнонимы башҡа төрки атамалар (этнос атамалары) араһында иң боронғоларҙан һанала. Башҡорттар менән бер ваҡытта йәшәгән күк (кек) төркиҙәр, оғуҙҙар, түргәштәр, кимактар, хазарҙар, Иҙел болғарҙары, бәшәнәктәр күптән инде юҡҡа сығып, тарихта исемдәре генә һаҡланып ҡалған.

Башҡорттар хаҡында тәүге яҙма мәғлүмәттәр Ҡытай яҙмаларында, "Суй-шу" хроникаһында 647 йылда телгә алына. IX быуат уртаһында Арал диңгеҙенән төньяҡҡараҡ йәшәгән халыҡ булараҡ, ғәрәп сәйәхәтсеһе Сәләм Тәржемән башҡорттар хаҡында яҙып китә. Көньяҡ Уралда йәшәүсе халыҡ булараҡ, уларҙы X быуат сәйәхәтсеһе Әхмәт ибн Фаҙлан, "ғәрәп Геродоты" Ғәли әл-Мәғсүди, X быуат географтары әл-Бәлхи, әл-Истахри, ибн Хаукәл билдәләй. Башҡортостан һәм уның ҡалалары хаҡында иң киң мәғлүмәтте XII быуат ғәрәп-сицилия сәйәхәтсеһе Мөхәммәт әл-Иҙриси бирә. XIII быуат тарихсылары Шамсетдин әд-Димашки, Исмәғил Әбү Фиҙа, шулай уҡ XVI быуат ғәрәп энциклопедистары Ғабдрахмән ибн Халдун, Шиһабетдин Әхмәт әл-Ғүмәри дөйөм картинаны айырым деталдәр менән тултыра. Көньяҡ Урал башҡорттары хаҡында шулай уҡ XIII-XIV быуатта йәшәгән көнбайыш сәйәхәтселәре Плано Карпини, Рубрук, Иоганка Венгр, шулай уҡ XIV быуат картографы Пиццигани, билдәле каталон атласын (1375 йыл) төҙөп ҡалдырған Авраам Крескес һәм Герард Меркатор ҙа (1512-1594 йй) яҡшы белә.

Башҡортостан Рәсәй составына ингәндән һуң, башҡорттар үҙ ерҙәренә аҫабалыҡ хоҡуғына эйә булалар (был хоҡуҡ 1917 йылдағы Ер декреты менән юҡҡа сығарыла). Шул уҡ ваҡытта аҫабалыҡ хоҡуғын башҡорттарға Сыңғыҙхан да биргән була. Был турала урта быуаттарға ҡараған "Дәфтәри Сыңғыҙнамә" әҫәрендә яҙыла. Унда шулай уҡ власть һәм ерҙәр бирелгән башҡорт ырыуҙары башлыҡтарының исемдәре лә телгә алына. Аҫаба башҡорттарҙың төп үҙенсәлеге булып башҡорт атамаһының этносты ла, сословиены ла аңлатыуы була, йәғни башҡорттар бер үк ваҡытта этнос та, сословие ла була.

### Татарстанда йәшәгән башҡорттарҙың юҡҡа сығыуы

Бөгөнгө Татарстан республикаһының көнсығыш райондары Ыҡ һәм Зәй, Иж һәм Кама буйҙары Бүләр, Байлар, Юрмый, Гирей, Ҡырғыҙ, Йылан, Йәнәй улыстарына ҡарай. Башҡорттар был ерҙәрҙә үҙҙәренең аҫабалыҡ хоҡуҡтарын һаҡлап йәшәгән була. Кантон идаралығы индерелгәс тә был улыстарҙа йәшәгән халыҡтың Башҡорт-мишәр, һуңынан башҡорт ғәскәрҙәренә индерелеүенең сәбәбе ошо. Әммә ваҡыт үтеү менән төрлө эске һәм тышҡы сәбәптәр арҡаһында урындағы халыҡ үҙенең милли үҙенсәлектәрен юғалта башлай, тамырҙарын онота. V, VII, VIII, X ревизияларҙың, 1912-1913 йылдарҙа үткәрелгән крәҫтиән хужалыҡтарының иҫәбен алыу, 1917 йылдағы ауыл хужалығын иҫәпкә алыу кампанияларының һөҙөмтәләре быны асыҡ күрһәтә. XVIII-XX быуат башында үткәрелгән халыҡ иҫәбен алыу кампаниялары Миңзәлә, Бөгөлмә, шулай уҡ Елабуға, Сарапул өйәҙҙәренең көньяғында башҡорт ауылдарының күпселектә булыуын теркәй. Улар араһында башҡорт-типтәр, башҡорт-типтәр-мишәр ауылдары булһа ла, дөйөм алғанда, был төбәктә башҡорттар һан яғынан өҫтөнлөк итә. Быны яҙма документтар ғына түгел, төрлө йылдарҙа баҫылып сыҡҡан этнографик карталар ҙа күрһәтеп тора.

1897 йылдағы Бөтә Рәсәй халыҡ иҫәбен алыу мәғлүмәттәренә ҡарағанда, Өфө губернаһының Миңзәлә өйәҙендә, йәғни Татарстан республикаһының бөгөнгө Туҡай, Саллы, Сарман, Миңзәлә, Мөслим, Аҡтаныш райондарында 123 056 башҡорт йәшәгән. Сағыштырыу өсөн: татарҙар ул ваҡытта 107025, типтәрҙәр - 14 875 булған, Вятка губернаһында (Татарстан республикаһының Менделеевск һәм Ағырҙы райондарында) 13909 башҡорт була. Һамар губернаһының Бөгөлмә өйәҙендә (Аҙнаҡай, Баулы, Ютазы, Әлмәт, Лениногорск, Бөгөлмә райондары) 29647 башҡорт йәшәй. 1912-1913 йылдарҙа крәҫтиән хужалыҡтарын иҫәпкә алыу кампанияһына ярашлы, Өфө губернаһының Миңзәлә өйәҙендә йәшәгән 458239 кешенең 154234-е башҡорт була. (Сағыштырыу өсөн: урыҫтар-135150, татарҙар - 93403, типтәрҙәр - 36783, керәшендәр 26058 кеше була). Күренеүенсә, татарҙар, типтәрҙәр, керәшендәрҙе бергә алғанда ғына һан яғынан улар башҡорттар менән тиңләшә алған. Әммә һуңынан башҡорттарҙың ҡырҡа кәмеүе күҙәтелә. 1920 йылда ТАССР-ҙа 121300 башҡорт йәшәһә, 1926 йылда уларҙың һаны 1800-гә генә тороп ҡала, мишәрҙәр 3-әү була, ә типтәрҙәр бөтөнләй ҡалмай. Әлбиттә, халыҡтың ҡырҡа кәмеүе тәбиғи сәбәптәр менән генә аңлатылмай, был административ баҫымдың нәтижәһе була. Шулай булыуға ҡарамаҫтан, XX быуаттың 60-сы йылдарында үткәрелгән фольклор-этнографик экспедициялар үрҙә телгә алынған райондарҙа халыҡтың күп өлөшө үҙен башҡорт тип һанауын дауам итеүен күрһәтә.

### Типтәрҙәр хаҡында

XVII-XX быуаттарҙа Урал-Иҙел буйында барған процестарҙы яҡшыраҡ аңлау өсөн типтәрҙәр тип аталған халыҡ төркөмөнөң килеп сығыуын ҡарап китергә кәрәк. Улар Рәсәйҙең башҡа өлөштәрендә билдәле түгел, сөнки телгә алынған төркөм тулыһынса башҡорттарҙың аҫабалыҡ хоҡуғы менән бәйле булған сәбәптәр арҡаһында барлыҡҡа килә. Типтәрҙәрҙең ниндәйҙер урында йәшәүе иһә, был ерҙәрҙең башҡорттарҙың тарихи ерҙәренә ҡарауын күрһәтеп тора.

Ә.З. Әсфәндийәров үҙенең хеҙмәттәрендә был халыҡ төркөмөнөң килеп сығыуын башҡорт халҡының эске үҫеше менән аңлата. Уның фекере буйынса, тәүге типтәрҙәр ер менән хужалыҡ итеү хоҡуғынан мәхрүм ҡалған башҡорттар булараҡ барлыҡҡа килә. Был осраҡта улар аҫаба башҡорттар булыуҙан туҡтап, башҡорт припущенниктарына әйләнә. Типтәрҙәр аҫаба башҡорттарының ерҙәрен ҡуртымға алып йәшәй. Шул уҡ ваҡытта тыуған улыстарында улар ер хужалары булып ҡалыуын дауам итә. Күпмелер ваҡыттан уларҙың ҡайһы берҙәре үҙҙәренең яҡташтары менән бәйләнеште юғалта, йәки тыуған яҡтарынан көс менән ҡыуып сығарыла. "Типтәр" социаль терминының килеп сығыуын да "тибелеү" һүҙе менән бәйләйҙәр.

Тәүге осорҙа төрлө социаль-иҡтисади сәбәптәр арҡаһында хужалыҡ мөнәсәбәттәрендә хәлһеҙерәк булған башҡорт припрущенниктары типтәрҙәргә әйләнә. Улар өсөн башҡорт сословиеһына ҡараған яһаҡты түләү һәм үҙ кеҫәһенә хәрби хеҙмәт алып барыу ҡыйынға төшә. И. К. Кириллов һүҙҙәре буйынса, "улар ҡаҙнаға бер нәмә лә түләмәйҙәр". Шул уҡ ваҡытта "нығынған" типтәр ҡабаттан башҡорт "званиеһына" күсә алған. Шулай итеп, тәүге осорҙа типтәрҙәр менән аҫаба башҡорттар араһында ҙур айырмалыҡтар булмай. Тик 1632 йылда ғына килем юғалтырға теләмәгән дәүләт уларға махсус типтәр яһағы тәғәйенләй. Типтәрләшеү процесы тәү сиратта көнбайыш башҡорттарына йоғонто яһай, бының эҙемтәһе булып уларҙың (Юрмый улысы миҫалында) милли үҙенсәлектәрен юғалтыу тора. Мәҫәлән, бөгөнгө көндә Татарстандың Лениногорск районына ҡараған Һары Биҡкол ауылына башҡорт типтәрҙәре тарафынан нигеҙ һалынған була. Шуны ла билдәләргә кәрәк, башҡорттарҙы татар припущенниктары араһында ла күрергә була. Ҡайһы бер ауылдар кешеләре, иҡтисади мәнфәғәттәрҙе күҙ уңында тотоп, башҡортлоҡтан сығып, яһаҡлы татарҙар булып китә.

**Азамат САЛАУАТОВ әҙерләне.**
**(Дауамы бар).**

*БАШҠОРТ ҠАМУСЫ*



*Сергей РУДЕНКО*

# БАШҠОРТТАР

## Сәнғәт һәм фольклор

Биҙәкте сүкеп, тимергә көмөш ялатып эшләү Башҡортостанда һәр ерҙә лә киң таралыу таба. Сүкелгән биҙәктәрҙе төрлө ат егеү кәрәк-ярағында (**һүрәт**), тимер пластинкаларҙа, йәйә һәм уҡ һаҙаҡтарында күрергә мөмкин.



Пластиналар төрлө формала була: дүрт мөйөш, тура мөйөш, һигеҙ мөйөш, түңәрәк, ярым ай, йөрәк рәүешендә. Геометрик биҙәктәр ҙә осрай, әммә үҫемлек мотивтары өҫтөнлөк итә. Генетик яҡтан ҡарағанда, был мотивтар боронғо күсмә тормош алып барыусы (атап әйткәндә, алан) ҡәбиләләре менән бәйле, Башҡортостандан ситтә улар ҡаҙаҡтарҙа киң таралған.

Тимергә көмөш ялатылған һәм сүкелгән биҙәүестәр XIX быуат һуңында Урал тауҙарында ла, ялан Башҡортостанында ла һәр ерҙә осраған. Унда уҡ биҙәкте күнгә баҫып (тиснение), уҡ-һаҙаҡта, йәйә-һаҙаҡта, ҡаптырғаларҙа (күн сумка) осраған.

Күнгә баҫылған биҙәктәрҙең ике варианты билдәле: беренсеһе уҡ-һаҙаҡтың береһендә, икенсеһе ике йәйә-һаҙаҡта һәм күн сумкала. Барлыҡ предметтарҙа ла биҙәк үҫемлек рәүешендә. Һүрәттә күрһәтелгән беренсе вариантта ул бик ҡатмарлы һәм ныҡ стилләштерелгән. Шундай уҡ биҙәктәрҙең көнбайыш ҡаҙаҡтарҙың ҡәбер таштарында булыуы ла бидәле.



Икенсе вариантта (**һүрәттәр**) бер үк төп биҙәк төшөрөлә - каса япраҡлы өс тажлы сәскә. Бигерәк тә бер үк элементтың формаһы төрлө булған майҙанға төшөрөлөүе ҡыҙыҡлы. Был осраҡта предметтарҙың формаһына баҫым яһала һәм үҙенсәлекле композициялар барлыҡҡа килә. Был типтағы орнаменттар һәм биҙәктәр ҙә бик боронғо һәм улар башҡорттарға ғына түгел, ә ҡаҙаҡ һынлы сәнғәтенә лә хас.





Башҡорт һынлы сәнғәтенә аппликация техникаһы һәм уға бәйле мотивтар хас. Уны беҙ, нигеҙҙә, төҫлө, йыш ҡына ҡыҙыл, һары, йәшел туҡыманан киҫеп, ҡатын-ҡыҙҙарҙың сарыҡ, ҡата кеүек аяҡ кейемдәренә тегелгәнен күрәбеҙ. Ҡайһы берҙә туҡыманан киҫеп алынған биҙәктәр ҡатын-ҡыҙҙарҙың аҡ еләненә йәки ҡатын-ҡыҙ эйәренең сергеһенә тегелә. Аппликация техникаһында башҡарылған биҙәктәр йышыраҡ тау һәм ялан, нигеҙҙә Урал аръяғы башҡорттарында осрай.

Ҡатын-ҡыҙҙың сарыҡ йәки ҡатаһына аппликация техникаһында башҡарылған сағыу һәм ҡатмарлы композициялар ябай элементтарҙан тора. Улар араһында тешле, бысҡы рәүешендәге һыҙыҡтарҙы, уҡҡа оҡшаш фигураларҙы, бер-бер артлы аралашып килгән өс мөйөштәр һәм өс варианттағы япраҡтар, "йүгерек тулҡын" рәүешендәге, йөрәккә оҡшаш биҙәктәрҙе күрергә мөмкин (**һүрәттәр**).



*✓ Кемдер үҙенең күңеленә ятҡан йәрен тап итә һәм ғүмере буйы бәхеткә төрөнөп йәшәй, ә кемдер үҙ яртыһын тапмайынса ҡаңғыра. Мин тәүгеләр рәтендә булыуым менән бәхетлемен.*

# АТАЙ МЕНӘН балаларҙың

**Ғаилә - үҙенә генә хас ғәҙәттәре, һәр ғаилә ағзаһына аңлайышлы һәм йөрәгенә яҡын йолалары, билдәле бер тәртипкә һалынған көнитмеше булған бер бөтөн һәм теүәл ғаләм. Бәхетле ғаиләләрҙә көндәшлеккә һәм көнсөллөккә, хыянатҡа һәм хаслыҡҡа урын юҡ. Ундай мөхәббәт утрауында бер кем дә үҙен артыҡ итеп түгел, ә кәрәкле һәм мөһим итеп тоя, бер-береһенә терәк-таяныс һәм кәңәштәш була. Бөгөнгө осрашыуға тап ошондай бәхетле иштәрҙең береһе, Өфө ҡалаһының 13-сө башҡорт балалар баҡсаһы-башланғыс мәктәбе тәрбиәсеһе Зәлифә һәм Башҡортостан Республикаһының Милли әҙәбиәт музейы директоры урынбаҫары Азамат ВӘЛИЕВтарҙы саҡырып, ғаилә мөнәсәбәттәре хаҡында әңгәмә ҡорҙоҡ.**

**▶ Танышыуығыҙ нисек булды? Һеҙҙе бер-берегеҙҙәге ниндәй сифаттар ылыҡтырҙы? Ғаилә ҡороу ниәтен күңелегеҙҙә оҙаҡ әҙерләнегеҙме?**

**Азамат:** Зәлифә менән танышыуыбыҙ ябай ҙа, бер үк ваҡытта ҡыҙыҡ та килеп сыҡты. Яҙмышымды хәл иткән осрашыуға яҡын кешеләрем өлөш индерҙе. Улар биргән телефон номерына шылтыратып, Зәлифәне Салауат Юлаев һәйкәле янына осрашыуға саҡырҙым. Тәүге осрашыуға хас була торған тулҡынланыу һөйләшелгән сәғәткә Зәлифә килмәгәс, тағы ла арта төштө. Батырыбыҙ һәйкәле янында бер аҙ танау өшөткәндән һуң, бар ҡыйыулығымды йыйып, уға тағы ла берҙе шылтыраттым.

**Зәлифә:** Ә мин был ваҡытта Азаматты Телеүҙәк ҡаршыһындағы ЗАГС янында көтөп тора инем. Өфөгә күптән түгел генә килгәс, Салауат Юлаев һәйкәленә барғаным юҡ ине әле. Осрашыуға килгән мәлдә ҡараңғы төшөп, күҙ бәйләнгән мәл ине һәм миңә һәйкәл торған майҙан нисектер шомло күренде. Шуға күрә осрашыу урынын ЗАГС эргәһенә күсерҙем дә ҡуйҙым.

**Азамат:** Зәлифәнең мине ЗАГС эргәһендә көтөп тороуын белгәс, башыма "Яҙмыштыр был", тигән уй килде. Һәм мин яңылышмағанмын. Никахлашыу йорто янында осрашып танышыуыбыҙ беҙҙе ҡауыштырҙы, бер ғаилә итте. Берберебеҙҙе оҙаҡ һынап, күҙләп йөрөмәнек, бергә булырға тейешлегебеҙҙе тиҙ аңланыҡ.

**Зәлифә:** Ысынлап та, күңелдәр тәү күрешкәндә үк беректе. Азаматтың тыныс һәм ипле генә итеп һөйләшеүе, ябайлығы мине әсир итте. Холҡоноң тыныслығы менән атайыма оҡшаған, ә ҡыҙ бала өсөн ысын ир-ат өлгөһө - ул атай кеше. Шуға күрә Азаматта атайымдың һыҙаттарын күреү уны тағы ла яҡынырaҡ итте. Ғөмүмән, кеше өсөн ғаилә ата-әсә йортонан башланалыр, тип уйлайым. Һәр кем тыуған йортондағы яҡтылыҡты үҙе ҡорған ғаиләлә күрергә теләй һәм шуға ынтыла. Ә янында ошоға булышлыҡ итерҙәй ышаныслы һәм ныҡлы терәктең булыуы быға ярҙам ғына итә. Азамат йөҙөндә нәҡ ошондай кешене табыуыма яҙмышыма рәхмәтлемен. Шулай уҡ беҙҙе халҡыбыҙҙың элекке йолаһы буйынса димләп таныштырыусыларыбыҙҙы ла һәр ваҡыт хөрмәт менән иҫкә алам, сөнки нәҡ улар ярҙамында беҙ бер-беребеҙҙе таптыҡ һәм ғаилә усағыбыҙҙы тоҡандырҙыҡ.

**Азамат:** Ғаилә ҡороу, үҙ мөйөшөн булдырыу тураһында уйлана башлаған һәр егеттең хыялында ҡатын-ҡыҙҙың ниндәйҙер образы йәшәй. Кемдер үҙенең күңеленә ятҡан йәрен тап итә һәм ғүмере буйы бәхеткә төрөнөп йәшәй, ә кемдер үҙ яртыһын тапмайынса ҡаңғыра. Мин тәүгеләр рәтендә булыуым менән бәхетлемен. Зәлифә тәү күргәндә үк аҡылы, матурлығы һәм тыйнаҡлығы менән күңелемә ятты. Бергә донъя көтә башлағас, ул сифаттар тағы ла тулыланды. Эргәмдә изге күңелле, ярҙамсыл, иғтибарлы һәм ихтирамлы кәләшем булыуы тормошомдо тулыландыра.

**Зәлифә:** Бер-береһе менән һөйләшер һүҙ тапмаған ғаиләләр була. Был бик аяныс, сөнки ысын күңелдән аралашыу булмаған өйҙә ир менән ҡатын ғаилә түгел, ә бергә йәшәргә мәжбүр булған өйҙәштәрҙе хәтерләтә. Миңә был йәһәттән дә уңыш йылмайҙы, сөнки Азамат менән төрлө темаға йөкмәткеле итеп рәхәтләнеп һөйләшеп була. Уның һәр ваҡиғаға үҙ фекере булыуы, ниндәй осраҡта ла юғалып ҡалмайынса, аҡыллы итеп эш итә белеүе ғаиләбеҙҙе ныҡлы һәм иртәгеһе көнөбөҙҙә ышаныслы итә. Осрашып йөрөгәндә башымды мең төрлө уй сүкей торғайны. Һәр саҡ эстән генә "Азамат менән тормошобоҙҙо бәйләһәк, бәхетле булыр инемме?", "Ә мин уны бәхетле итә алырмынмы?", "Был хаҡта ул нисек уйлай икән?" тигән һорауҙар күңелемә тынғылыҡ бирмәне. Хәҙер килеп, ысын күңелдән "Аллаға шөкөр, беҙ - бәхетле!" тип әйтә алам.



*Күңелдәр тәү күрешкәндә үк беректе. Азаматтың тыныс һәм ипле генә итеп һөйләшеүе, ябайлығы мине әсир итте. Холҡоноң тыныслығы менән атайыма оҡшаған, ә ҡыҙ бала өсөн ысын ир-ат өлгөһө - ул атай кеше. Шуға күрә Азаматта атайымдың һыҙаттарын күреү уны тағы ла яҡынырaҡ итте. Ғөмүмән, кеше өсөн ғаилә ата-әсә йортонан башланалыр, тип уйлайым. Һәр кем тыуған йортондағы яҡтылыҡты үҙе ҡорған ғаиләлә күрергә теләй һәм шуға ынтыла. Ә янында ошоға булышлыҡ итерҙәй ышаныслы һәм ныҡлы терәктең булыуы быға ярҙам ғына итә. Азамат йөҙөндә нәҡ ошондай кешене табыуыма яҙмышыма рәхмәтлемен.*

**▶ Ғаилә ҡорғандан һуң ҡатын менән ир бер-береһен яңынан "аса": икенсе яртыһының бығаса беленмәгән холоҡ-фиғеле менән осраша, уның ҡайһы бер ҡылыҡтары ят һәм сәйер кеүек тойола, төрлө етешһеҙлектәре күҙгә ташлана башлай. Ошондай аңлашылмаусанлыҡтарҙы нисек үттегеҙ? Ғөмүмән, ундай осор ғаилә ҡорғандың тәүге йылдарында ғына күҙәтеләме, әллә бер-береңде өйрәнеү, тормош юлдашыңды тулыһынса ҡабул итеп алыу ғүмер буйы дауам итәме?**

**Азамат:** Кешене нисек бар, шулай ҡабул итергә өйрәнергә кәрәк. Яҡшы сифаттарын да, етешһеҙлектәрен дә. Барыһы ла ғаилә ҡорғанға тиклем үҙенең ниндәй ир йәки ҡатын, ниндәй атай йәки әсәй булырын һәм шулай уҡ тормош иптәшенең дә ниндәй булыуын күҙ алдына баҫтырырға тыryша. Ләкин уларҙың барыһы ла бары тик күҙаллау ғына һәм нисек кенә булмаһын, хыялыбыҙҙа беҙ үҙебеҙҙе лә, икенсе яртыбыҙҙы ла идеаллаштырабыҙ. Ә ғаилә ҡорғас, ул идеалдар йә ысынбарлыҡҡа тап килә, йә тура килмәй. Осрашып йөрөгән ваҡытта һәр иш бер-береһенә мөхәббәт пәрҙәһе ҡаплаған күҙҙәр аша баға һәм йәрендә нәҡ идеалындағы һыҙаттарҙы күреп, никахлашҡандан һуң да бер нәмә лә үҙгәрмәйәсәк, тигән ышаныста йәшәй. Тик ысынбарлыҡ алһыу күҙлекте тиҙ систерә һәм барыһын да үҙ урынына ҡуя - икенсе яртыңдың быға тиклем беленмәгән һыҙаттары күренә башлай. Һәм улар йә күңелгә ята, йә юҡ.

Миңә был йәһәттән уңыш йылмайҙы. Зәлифә менән осрашып йөрөгәндә ул ниндәй булған, өйләнешкәс тә шундай булып ҡалды. Ундағы асыҡ күңеллелек, ихласлыҡ күп ғаиләләрҙә күҙәтелгән "йышылыу"ҙы урап үтергә ярҙам итте. Шулай уҡ бер-беребеҙгә булған һөйөү хистәре лә һәр мәсьәләлә лә уртаҡ фекергә килеүгә булышлыҡ итәләр, тип уйлайым. Артабан да шулай бер-беребеҙҙе ярты һүҙҙән аңлап йәшәрбеҙ, тип ышанам.

**Зәлифә:** Ғаилә ҡорғас, бер-беребеҙҙе яңынан "астыҡ", тип әйтә алмайым, сөнки мөнәсәбәттәр башланғанда уҡ арабыҙға алдашыу, хәйләләшеү, нимәнелер әйтеп бөтөрмәү, йәшереү кеүек күренештәрҙе индермәҫкә тырыштыҡ, яһалмалыҡҡа юл ҡуйманыҡ. Бер кем дә үҙенең булмышын яҡшыраҡ, юғарыраҡ итеп күрһәтергә тырышманы. Шуға күрә беҙгә был проблема ҡағылманы. Шулай уҡ холҡобоҙҙоң оҡшашлығы ла, бер төрлөрәк фекер йөрөтөүебеҙ ҙә төрлө ҡытыршылыҡтарҙы урап үтеүҙә үҙ ролен уйнағандыр.

**▶ Ғаиләләге тотороҡлолоҡ һөйөүгә генә түгел, ә көнкүреш мәсьәләләрен йырып сығыуға ла тығыҙ бәйләнгән. Һеҙ был йәһәттән ниндәй һынауҙар үттегеҙ?**

**Азамат:** Өфөлә эшләүсе күпселек йәштәрҙең алдында торған иң мөһим мәсьәлә - торлаҡ проблемаһын хәл итеү. Яңғыҙ саҡта ҡайҙа ла башың һыя, тигәндәй, дуҫтар йә туғандар менән бергәләп ҡуртымға фатир алып көн итергә мөмкин. Ә ғаиләле булғас, бигерәк тә бала тыуғас, торлаҡ мәсьәләһе бермә-бер ҡатмарлаша. Йәш ғаиләгә фатир өсөн түләүҙе үҙенә генә күтәрергә тура килә. Икенсе яҡтан, йәш балалы ғаиләне фатирға индерергә теләүселәр ҙә әҙ. Ләкин зарланып ултырыуҙан йорт та төҙөлмәй, фатир аҫҡысы ла ҡулға төшмәй, шуға күрә ҡыбырларға, йүгерергә, мәсьәләләрҙе хәл итергә кәрәк ине. Оҙаҡ йылдар бер-нисә урында эшләп, фатирҙы ҡуртымға алып йәшәгәндән һуң, үҙ торлағыбыҙҙы, ғаилә усағыбыҙҙы "Үҙ йортом" дәүләт программаһы ярҙамында булдырҙыҡ.

**Зәлифә:** Ысынлап та, йәш ғаилә алдында төрлө һынауҙар ҡалҡып ҡына тора. Ләкин берҙәм булғанда, барыһын да уртаға һалып һөйләшеп, кәңәш итеп эшләгәндә, ауырлыҡтарҙы йырып сығып була. Шулай уҡ дәүләт тарафынан да йәштәргә етди ярҙам күрһәтелә - яйлап булһа ла эш хаҡы күтәрелә, күп балалы ғаиләләргә бушлай ер бүленә, әсәлек капиталы бирелә.

**Азамат:** Хөкүмәттең лайыҡлы йәшәүгә шарттар булдырыу буйынса ниндәйҙер эш алып барыуын инҡар итеп булмай, ләкин документтар менән бул-

ған бюрократик волокита күптәрҙең ҡулын төшөрә. Әлеге ваҡытта төрлө программалар эшләй, улар хаҡында ваҡытында хәбәрҙар булып, үҙ файҙаңа ҡуллана белеү кәрәк. Тик ҡағыҙҙа яҙылғанды уҡыу - бер булһа, уны тормошҡа ашырыу бөтөнләй икенсе. Шуға күрә, баштан уҡ үтәһе юлдың еңел булмаясағын аңлау килеп тыуған проблемалар алдында баҙап ҡалмаҫҡа ярҙам итәсәк. Беҙгә әлеге өйөбөҙҙө төҙөп сығыу еңелдән булманы. Бихисап документтар, төрлө белешмәләр йыйыу, тулыландырыу, күпмелер ваҡыттан һуң яңыртыу өсөн Өфө, Ғафури һәм Ейәнсура юлдарын күп тапарға тура килде. Өмөттө өҙгән саҡтар ҙа булды, ләкин теште ҡыҫып түҙҙек һәм барыһын да йырып сыҡтыҡ. Бөгөнгө көндә ниндәйҙер программа ярҙамында өй ҡалҡытҡан йәш ғаиләләрҙең барыһы ла ошо юлды үткәненә иманым камил. Шуға күрә,

кеүек ҡаранылар. Ә хәҙер был ҡараштар бөтөнләй икенсе яҡҡа үҙгәрҙе. Егеттәр һәм ҡыҙҙар "ирекле" һөйөү хаҡында һүҙ йөрөтә, ЗАГСта яҙылышмайынса ғына йәшәүҙең тик ыңғай күренеш икәнлеген иҫбатларға тырыша. Ләкин ирекле һөйөү ҙә, никахлашмайынса йәшәү ҙә мөхәббәтте юҡ итә, тәрән мөнәсәбәттәр төҙөүгә ҡамасаулай. Бер билдәле психотерапевт: "Беҙ психологик яңғыҙлыҡ етди киҙеүгә әйләнәсәк донъяға инеп барабыҙ. Тик ғаиләлә генә үҙебеҙҙе яңғыҙ итеп тоймау ихтималлығы биргән рухи яҡынлыҡты табасаҡбыҙ. Был хаҡта онотторға ярамай", - ти. Мин был һүҙҙәр менән тулыһынса килешәм. Шулай уҡ ғаилә кешегә яуаплылыҡ өҫтәй, минминлекте бөтөрә.

**Зәлифә:** Ғаиләле булыу кешене яҡлаулы итә. Тормошта төрлө ваҡыттар булырға мөмкин. Ғаиләле булып йәшәгәндә ауырлыҡтарҙы, ҡайғыла-осраҡта ла мөхәббәт тураһында һүҙ бара, ләкин уны күрһәтеү рәүеше төрлө. Ғаиләлә ул етдиерәк, йөкмәткелерәк, талапсаныраҡ. Бер-береңде аңлап йәшәү өсөн күберәк көс түгергә, сыҙамлыраҡ, тынысыраҡ, аңлыраҡ булырға тура килә. Беҙ икебеҙ ҙә быны яҡшы аңлайбыҙ һәм һәр ваҡыт ғаиләләге мөнәсәбәткә һаҡсыл ҡарайбыҙ. Һәм, тәбиғи, был беҙгә ниндәйҙер аңлашылмаусанлыҡтар булдырмаҫҡа ярҙам итә.

Шуныһы ла бар - йәмғиәттең дә ғаиләле кешегә ҡарата ҡарашы икенсе төрлө. Әгәр ҙә буйҙаҡлыҡҡа ниндәйҙер кимәлдә елбәҙәклек хас кеүек итеп ҡаралһа, өйләнгән ир йәки кейәүҙәге ҡатын етдиерәк, йүнселерәк, донъясылыраҡ итеп ҡабул ителә.

**Зәлифә:** Ғаилә ҡороу - тормоштоң яңы этабы, ғүмер китабының сираттағы бүлеге. Ул бүлектең ниндәй булыуы - бәхетлеме йәки бәхетһеҙме - дәр, тыуған ерҙәрен ятаһындар тигән маҡсатта, алыҫ булһа ла, уларҙы Өфөнөң 13-сө һанлы башҡорт балалар баҡсаһы-башланғыс мәктәбенә йөрөтәбеҙ.

**Зәлифә:** Һәйбәт тәрбиә нигеҙе, тәү сиратта, үҙең рухлы булыуҙа. Үҙең урыҫ телендә һөйләшеп, сит мәҙәниәтте үҙ итеп, халҡыңдың тарихын ихтирам итмәйенсә, балала рухлылыҡ тәрбиәләргә тырышыу ыңғай һөҙөмтә бирмәй. Шуға күрә беҙ балалар менән һәр саҡ тик башҡорт телендә генә аралашабыҙ, үҙебеҙҙең телдә әкиәттәр уҡыйбыҙ һәм бергәләп башҡортса йырҙар тыңлайбыҙ. Хәҙер үҙең бушамайыраҡ торған ваҡытта балаларға компьютерҙан башҡорт телендә әкиәттәр күрһәтергә була - был бик уңайлы. Шулай уҡ һәр кем өсөн оло мәктәп, рухиәт донъяһы - ул ҡартатай һәм өләсәй тәрбиәһе, шуға күрә улар янына йышыраҡ ҡайтырға тырышабыҙ.

нән үҙебеҙҙең ғаиләбеҙҙә лә балаларҙың күп булыуына әҙерләнгәнбеҙҙер, тип уйлайым. Балаларыбыҙ ярҙамсыл, бер-береһе өсөн өҙөлөп тора, үҙҙәрен генә түгел, туғандарын да ҡайғыртыусан булып үҫеп киләләр.

**Азамат:** Беҙ бәләкәй саҡта ҡаҙ көттөк. Яҙ һайын ҡаҙыбыҙ бәпкәләр баҫып сығара ине. Ҡайһы бер йылда бәпкәләр күп була, ә ҡайһы саҡта әҙ йәки бөтөнләй бер генә бәпкә сыҡҡан саҡтар ҙа булды. Шул яңғыҙ бәпкәне йәлләгәнем һәр саҡ иҫемдә. Йонсоу ҙа, бер үк ваҡытта моңһоҙ ҙа йән эйәһенә ҡарап тороуы ла күңелһеҙ ине хатта. Яңғыҙ баланы ла шул бәпкәгә оҡшатам. Беҙ ғаиләлә биш бала үҫтек - күңелле ине, әле лә, бергә йыйылһаҡ, күңелгә бер байрам.

Шуныһы ла бар - ғаиләлә балалар һаны күп булһа, улар аралашыусан, йор һүҙле, отҡор булалар. Һәр баланың үҙ характеры, ынтылыштары, өҫ-

# ӘСӘЙҘӘН ТОРА...

## тәртибе лә, рух ныҡлығы ла

үҙендең ныҡышмалығың, тырышлығың булмаһа, дәүләт тәҡдим иткән ярҙамдан файҙа күреп булмай. Тәү сиратта, барыһы ла кешенең үҙенең ҡулында.

**▸ Кешелә ғаилә ҡиммәттәре тураһындағы төшөнсә нисек формалаша? Ул ата-әсә тәрбиәһе аша һалынамы, әллә һәр кем уға, тәғәйен ваҡыты еткәс, үҙе төшөнәме?**

**Азамат:** Ул төрлөсә формалаша, минеңсә. Бында, әлбиттә, атай-әсәй тәрбиәһенең роле ҙур. Нәҡ уларҙың үҙ балаларына өлгө булып тороуы, нимә яҡшы, нимә насар булыуын аңлатып тәрбиәләүҙәре башланғыс булһа, ошо тәрбиә нигеҙендә һәр кеше үҙен формалаштыра, үҫтерә, ғаилә ҡиммәттәренә төшөнә һәм ғүмере буйына уны байыта.

**▸ Ғаиләле булып йәшәү кешегә нимә бирә? Ғаилә ҡорғандан һуң мөхәббәтте көндәлек тормош "йотмаймы"? Ошолар хаҡында ла һөйләһәгеҙ, кәләш алыуҙы, кейәүгә сығыуҙы төрлө сәбәптәр табып кисектерә килгән, йә булмаһа ғаилә институтын бөтөнләй инҡар итеүселәрҙең ҡолағына мәғлүмәт булыр ине...**

**Азамат:** Ғаилә - ул милләттең, кешелектең киләсәге. Быны бер кем дә инҡар итә алмай, ул шулай булған, бар һәм буласаҡ. Уҙған быуатта ғаилә ҡороуҙың, балалар тәрбиәләп үҫтереүҙең һәйбәт һәм кәрәк булыуын иҫбатларға кәрәкмәй ине. Ғаилә ҡорорға теләмәгәндәргә йә иҫәргә, йә эше уңмай торған кешеләргә ҡараған

рҙы үткәреп ебәреү еңелерәк. Шатлыҡлы минуттарҙы бүлешер, һинең уңыштарыңа ихлас ҡыуанған кешең булыуы ла тормошто йәмләндерә. Башҡа берәүгә лә һөйләмәҫ серендә лә тормош иптәшеңә сисәһең. Икеләнгән саҡта дәртләндереп ебәреүсе лә, хәүефтәрҙе таратыусы ла, йөрәктә ышаныс утын тоҡандырыусы ла - хәләл ефетең. Ғаиләне тулыландырып, илар сағында ла йөҙөңдә йылмайыу уятыусы балалар тыуа һәм һәр көндө тағы ла әһәмиәтлерәк, сағыуыраҡ, күркәмерәк итә.

**Азамат:** Ғаилә ҡороу күп нәмәгә фекерҙе үҙгәрә. Хатта һө-

ир менән ҡатындан тора. Ғаиләле булып, мөхәббәт емештәре булып тыуған балаларҙы бағып тормош көтөүҙең бер көнө буйҙаҡлыҡтың тотош ғүмеренә алыштырғыһыҙ. Әлбиттә, ғаилә - ул хеҙмәт, ләкин ул рәхмәтле хеҙмәт.

**▸ Ғаилә көтөүҙә ваҡ әйберҙәр бармы?**

**Азамат:** Өй эсе бер-береһенә иғтибарлы һәм ихтирамлы ата-әсә наҙына төрөнөп үҫеүсе балалар тауышынан гөрләп торһа һәм һаулыҡ булһа, ҡалған нәмә, беҙҙеңсә, барыһы ла ваҡ әйберҙәр.

**Азамат:** Үҙ тамырын белмәгән - киләсәге булмаған, тигәнде хәтерҙә тотоп, балаларыбыҙға нәҫелебеҙҙең, ырыуыбыҙҙың аҡһаҡалдары, халҡыбыҙҙың бөйөк шәхестәре хаҡында һөйләйбеҙ. Халҡыбыҙҙың тарихы менән таныштырыу маҡсатында ҡалабыҙҙың төрлө музейҙарына йөрөйбөҙ, сөнки уларҙа шул тиклем бай хазина тупланған, ундағы һәр экспонат үҙе бер тарих, дөрөҫлөк бәрәмеге. Балалар өсөн уҙғарылған төрлө сараларҙы ҡалдырмаҫҡа тырышабыҙ, сөнки унда булыу уларҙы ғына түгел, беҙҙе лә рухи яҡтан байыта, күңелдәрҙе ял иттерә.

**Зәлифә:** Икебеҙ ҙә күп балалы ғаиләлә үҫтек. Туғандар менән бергә шау-гөр килеп уйнау, ҙур өҫтәл артында әсәй бешергән тәмлекәстәр менән

төнлөктәре, яратмаған күренештәре, әйберҙәре, аш-һыуы бар. Балалар һаны бер нисәү булған ғаиләләрҙә улар бер-береһен рәнйетмәйенсә, үпкәләтмәйенсә генә алтын урталыҡты табырға тырыша һәм бары тик үҙенең мәнфәғәтен генә ҡайғыртыуҙан, үҙенең теләген генә алға ҡуйыуҙан азат була. Ә был, үҙ сиратында, киләсәктә мәктәптә, уҡыу йортонда, эш урынында, ғөмүмән, йәмғиәттә башҡалар менән матур итеп диалог ҡороуға булышлыҡ итә. Күп бала тәрбиәләгән ғаиләләрҙә ҡатын һәм ир, атай-әсәй һәм балалар араһында ла бәйләнеш тығыҙыраҡ була, минеңсә, сөнки бер-берендең күңел торошона һиҙемлерәк булыу һәләте барлыҡҡа килә. Шулай уҡ бындай ғаиләләрҙә һәр бер ғаилә ағзаһының уй-хыялдарын, ниәттәрен тормошҡа ашырыу күмәкләп башҡарыла, ә был иһә улар араһында тәрән психологик бәйләнеш булдыра.

**▸ Традицион һорау. Бәхетле ғаиләнең нигеҙе нимәлә?**

**Азамат:** Традицион яуап: һаулыҡта, мөхәббәттә һәм рухлылыҡта.

**Зәлифә:** Бер-берендә ихтирам итеүҙә, бер-береңә иғтибарлы булыуҙа, бер-берендә һөйөүҙә.

*Ғаилә - ул милләттең, кешелектең киләсәге. Быны бер кем дә инҡар итә алмай, ул шулай булған, бар һәм буласаҡ. Уҙған быуатта ғаилә ҡороуҙың, балалар тәрбиәләп үҫтереүҙең һәйбәт һәм кәрәк булыуын иҫбатларға кәрәкмәй ине. Ғаилә ҡорорға теләмәгәндәргә йә иҫәргә, йә эше уңмай торған кешеләргә ҡараған кеүек ҡаранылар. Ә хәҙер был ҡараштар бөтөнләй икенсе яҡҡа үҙгәрҙе. Егеттәр һәм ҡыҙҙар "ирекле" һөйөү хаҡында һүҙ йөрөтә, ЗАГСта яҙылышмайынса ғына йәшәүҙең тик ыңғай күренеш икәнлеген иҫбатларға тырыша. Ләкин ирекле һөйөү ҙә, никахлашмайынса йәшәү ҙә мөхәббәтте юҡ итә, тәрән мөнәсәбәттәр төҙөүгә ҡамасаулай.*

йөү хистәрен белдереү ҙә башҡаса төҫ ала. Күҙ алдына баҫтырайыҡ. Мәҫәлән, осрашып ҡына йөрөгәндә һөйгәненә көтөлмәгән бүләк эшләү маҡсатында егет икенсе ҡатҡа менеп, тәҙрәгә сәскә беркетһә, уның был аҙымы көслө мөхәббәт менән аңлатыласаҡ. Ә инде ғаилә ҡорғас, ир кеше ҡатынына ошо рәүешле сәскә бүләк итһә, уның ҡыланышын, йомшаҡ итеп әйткәндә, иҫәрлеккә тиңләйәсәктәр. Ике

**▸ Һеҙҙең ғаиләлә өс бала тәрбиәләнә. Күп балалы булыуҙың тик ыңғай күренеш икәнлеген ниндәй дәлилдәр менән нығытырһығыҙ?**

**Азамат:** Эйе, Аллаға шөкөр, йортобоҙға йәм өҫтәп ике улыбыҙ һәм ҡыҙыбыҙ үҫеп килә. Өлкәнебеҙ Шамил дүртенсе синыфта уҡый, ә Айзилә менән Алмаз балалар баҡсаһына йөрөй. Башҡорт рухлы булһындар, үҙ телдәрен белһен-

һыйланыу, атайҙың командалыҡ итеүе аҫтында бесән эшләү, һалҡын ҡышҡы кистәрҙә йылы өй түрендә күмәкләп ниндәйҙер шөғөл менән булыу - барыһы ла бала саҡтың яҡты хәтирәләре булып һаҡлана. Әлеге ваҡытта ла байрамдарға күмәкләшеп йыйылышып алыу үҙе бер ғүмер. Ниндәйҙер оло эш башҡарған саҡта ла туғандарға таянаһың, уларҙың ярҙамын күрәһең. Шуға күрә икебеҙ ҙә төпкөл аңыбыҙ ме-

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Һәр айырым ғаилә йәмғиәттең бер сағылышы, илдең бәләкәй генә, әммә мөһим өлөшө. Теге йәки был дәүләттең "сәләмәтлеген" нәҡ ғаиләләрҙең хәлторошона ҡарап белеп була. Бөгөнгө ҡунаҡтарыбыҙ кеүек, бар йәһәттән дә уңышлы, бәхетле ғаиләләр күберәк булған һайын, илебеҙ тотороҡло һәм ҡаҡшамаҫ дәүләт буласаҡ.**

**Гөлназ МАНАПОВА**
**әңгәмәләште.**

✓ *...Ысын кеүек ине бит әйткәндәре, һөйләгәндәре, күкрәгенән һыҡрап сыҡҡан кеүек ине бит хистәре лә... Зәғифләнгән яҙмышына Ғәлиәнең сарыфланмаған наҙын ҡушып үрһә, икеһе бер бөтөн камил, түңәрәк булырҙар кеүек ине...*






– Протез миндә, белмәгән кеше сатанлауҙы ла аңғармай ул. Аяғы ғына чепуха, бына бында ҡайтарылғас, енәйәтсе ише төрмәнән төрмәгә йөрөтөп, һорау алыуҙары, Хоҙай ҡушмаған нәмәләрҙә ғәйепләүҙәре йонсотто. Ауылда ла аңлаған-аңламағаны "дух" тип йөрөтә мине, - егет "кем икәнемде белдең - ҡыуып сығарһаң да була" тигән ҡиәфәттә ҡыҙға ҡарап алды. - Ҡайтыуыма оҙатып ҡалған ҡыҙым күптән балалар әсәһе ине инде, ҡарттар донъя ҡуйған, төп йортта ҡустым ғына. Мин аңҡы-тиңке килеп йөрөгәнсе, ҡустым өйләнде лә бала-сағалы булды. Үҙемә йорт күтәрергә дәрт таба алманым, шунда урам эсенә бәләкәй генә аласыҡ бурап алдым да, йәштәргә хужалыҡта ярҙам итеп, көн иткән булдым. Берәү менән дә аралашманым, һәр ваҡыт мине нимәләлер ғәйепле итеп күргән кешеләр менән аңлаша алмам кеүек булды. Бәлки, улар күптән был хаҡта иҫләмәйҙәрҙер ҙә, әммә үҙем онота алманым. Миңә ауылдаштарым "Тотҡонлоҡтан сәйерәк булып ҡайтҡан" тигән диагноз ҡуйған, бәлки, ысынлап та шулайҙыр...

- Бында ниңә...

- Командирым йыл да саҡырып хәбәр ебәрә ине. Бер ҙә килгәнем булманы. Сөнки үҙем ундай осрашыуға әҙер түгел инем. Бына был юлы, ниндәй ҡөҙрәт менәндер, хатты алғас та, йыйындым да, юлға сыҡтым. Төнө буйы һөйләшеп ултырҙыҡ. Нимәһе генә үкенесле: командирыма күптән килмәгәнмен. Ул минең өҙөлгән өмөтөмдө ялғаны, нисә йылдар ҡаңһырап торған йән ярамды шифалы усы менән япты. Оло йөрәкле, көслө рухлы, ҡаһарман кеше... Һеҙҙең кеүек ҡиммәтле тундар кейеп, алтын-көмөшкә төрөнгән һәм донъяны тик алһыу-зәңгәрҙә генә күргән зар-интизарһыҙ кешеләргә быны аңлауы, бәлки, мөмкин дә түгелдер... Һин бит уны, эскесе, тиһең...

Уңайһыҙ тынлыҡ урынлашты. Һауала сытырлап һиҙелгән көсөргәнештән ҡотолмаҡ булып, Ғәлиә шым ғына барып музыка ҡуйып ебәрҙе. Боролдо ла:

- Әйҙә, бейейек, - тине. Әйтәһен әйткәс кенә ҡунағының протез аяҡта икәнлеге ҡылт итеп иҫенә төштө. "Бына һиңә - тағы ла бер ахмаҡлыҡ!"

Ғаяздың ҡараштарында башта ҡапыл ғына ҡаушау сағылып киткәндәй булһа ла, ул, тороп, ҡыҙға табан атланы. Ысынлап аҡһай икән. Яҡын уҡ килгәс, һиҙелер-һиҙелмәҫ кенә башын эйгәндәй итте лә, ярайһы уҡ ҡыйыу ҡыланып, һыңар ҡулы менән биленән ҡосаҡлап алды. Арҡаһына ятҡан ҙур ҡаты устан һәм йөҙө ҡаршыһындағы киң күкрәктән бөркөлгән әйтеп аңлатҡыһыҙ татлы ла, ҡурҡыныс та булған йылылыҡтан Ғәлиәнең башы әйләнде, йөрәге дөпөлдәне. Иҙәнгә ҡаҙаҡланғандай булған үксәләрен саҡ айырып алып, әйләнеп китте. Үҙе йыландан арбалған ҡуян хәлендә ҡаршыһындағы зар һеңгән моңло күҙҙәрҙән ҡарашын ала алманы. Был күҙҙәр... Был күҙҙәр... Улар бит иркәләп... наҙлап... яратып ҡарай... Улар күңеленең иң төпкөл, иң йәшерен ҡылдарын табып алып тирбәтәләр... ҡытыҡлайҙар... Йылытыны йөрәген яҙғы ҡояш аҫтындағы боҙ киҫәге шикелле итеп ирете... ирете... Ҡаты ҡыҫылған ирендәренән, иртә бураҙналар йырған маңлайынан, елҡояшта янып ҡарайған асҡағыраҡ яңаҡтарынан бармаҡ остарын ғына йөрөтөп ҡарау теләге тыйып тотҡоһоҙ...

Егет башта ҡыҙҙың һиҙелер-һиҙелмәҫ дерелдәп эйәгенән үткән бармаҡ остарына иренен тигеҙҙе, тәрән тын алып, сәстәрен еҫкәне, унан һаҡ ҡына башта тамыры һеркелдәгән нәфис муйынын, ут булып янған сикәләрен, алһыу ирендәрен үпте...

Иҫенә килһә, көй туҡтаған, вальста әйләнмәйҙәр, ә ул мәңге айырылмаҫтай булып китеп, Ғаяздың ҡосағына һеңгән. Ҡыҙ сәсе туҙғыған башына аңы тулыраҡ ҡайтҡан һайын, нығыраҡ шаңҡыны, оялышынан егеттең ҡалын муйынын һыға ҡосаҡлаған беләктәрен тартып алырға ла хәле етмәй тора бирҙе.

- Ғәлиә... һин шундай тәмлеһең... хуш еҫлеһең... - ҡолағы төбөндә генә шыбырлап әйтелгән татлы һүҙҙәрҙән ҡапыл күңеле тулды ла, һатлыҡ йәштәре субырлап ҡойолоп та китте. - Илама, аҡыллым, илама... Әйттем бит, һиңә көлөп-йылмайып ҡына тороу килешә... Һин бит ҡышҡы ҡояш кеүек.

- Н-нишләп ҡ-ҡышҡы? - гүйә был мәлдә тап ошоноң хаҡында белеү мөһим.

- Ҡышҡы ҡояш ҡәҙерлерәк була, сөнки ул һирәк йылмая. Ә йәй ҡояштың ҡыҙҙырыуына өйрәнеп бөтәһең, һиҙмәйһең дә.

Ниһайәт, тыныслана төшкән ҡыҙ егеттең күкрәгенә устарын ҡуйып, этә биреп, ҡосағынан ысҡынды ла, өҫтәл эргәһенә килеп, ҡалаҡ-тәрилкәләрҙең әле береһен, әле икенсеһен тотҡолап, кире урындарына ҡуйҙы, бокалдарҙы шылдырҙы. Егет быны үҙенсә аңланы, уңайһыҙланғандай итеп, сәсен һыпырҙы ла:

- Ярай, Ғәлиә, мин ҡайтайым инде, һуң булып китте. Табын өсөн рәхмәт, - тип, сығыуға табан юлланды.

Шул ваҡыт Ғәлиә тап ошо мәлдә был фатирҙа яңғыҙ ҡала алмаясағын аңланы. Юҡ, ул бында яңғыҙ ҡала ла, яңғыҙ ултыра ла, яңғыҙ йәшәй ҙә алмай. Эйе-эйе. Йәшәй алмай! Ҡыҙ ни эшләгәнен дә белмәй, ашығып кейенә башланы. Юҡ! Ул яңғыҙ ҡалмаясаҡ!

- Төн уртаһында ҡайҙа йыйынып киттең? - ишек тотҡаһына тотонған Ғаяз ҡыҙҙың ашығып тунын кейгәненә ҡарай биреп торҙо ла, һорамай ҙа булдыра алманы.

- Мин? М-мин... Ә һин ҡайҙа?

- Минме? Бында ғына, Шакир ағайға бит һуң.

- Улайһа... м-миндә...

- Нисек?.. Шакир ағай йоҡлайҙыр ул...

- Йоҡ-ҡлаймы... Һин?..

- Мин?.. - Егет, урамға уйнарға атлыҡҡан еренән ишек төбөндә кире ҡайыртылған бала хәлендә ҡулына шарфын урап, илар сиккә етешкән ҡыҙ янына яҡын килде. - Нимә булды, Ғәлиә?

Шундай йомшаҡ, шундай яғымлы итеп бирелде был һорау. Күңелдең самаһыҙ тартылыуҙан бына-бына өҙөләм тип торған нескә ҡылдарына май булып тамды. Ғәлиәгә бит әлегә тиклем бер генә ир-аттың да улай яҡын килеп, күҙҙәренә наҙлап ҡарап, "Нимә булды?" тип өндәшкәне юҡ, булманы ла.

Нисек инде "Нимә булды?" Күрмәйһеңме ни, аяҡ аҫтында иҙән бәүелә, стеналар артҡа шыла, баш осонда түбә зырлап өйөрөлә... өйөрөлә... Тик теле былар хаҡында әйтә белмәй, ирендәре бөтөнләй икенсе төрлөнө бышылдай:

- Ҡалмайым бында... Яңғыҙымды ҡалдырма.

Хәлдең бындай боролошонан бер аҙ ҡаушап китһә лә, Ғаяздың да йөрәгендә ошо йомороҡай ғына, йомшаҡ ҡына, сабыйҙарса саф ҡарашлы илаҡ ҡыҙға ҡарата ғүмерҙә булмағанса ҡайнар, ярһыу тойғолар уянғайны, һәм ул, хистәренә баш булалмайынса, һуңғы бер-нисә сәғәт эсендә генә күңел түрен ялмап алыусыны туны-ние менән бергә ҡармап ҡосаҡлап алды ла, мәңге ысҡындырмаҫтай итеп күкрәгенә ҡыҫты:

- Ҡурҡма Ғәлиәм... мин һине бер ваҡытта ла ҡалдырмам.

* * *

Уянды. Күҙҙәрен асмай әле. Ул шулай күҙҙәрен асмайынса ғына уйлана биреп ятырға ярата иртәнсәк. Әле йоҡоһо туймағандан түгел, ә бүлмәлә уйнаған нурҙан күҙҙәре сағылып китер кеүек булғанға ята ул. Сөнки йөрәгендә балҡыған яҡтылыҡ бүлмәне лә, бүлмәне генә түгел, фатирын да, хатта бар йортто ла тултырғандыр бит инде.

Ниндәй рәхәт! Ул инде яңғыҙ түгел, уны яраталар, ул ярата! Тормош ниндәй йәмле, татлы, илаһи...

Ғәлиә керпектәрен иренеп кенә елпетеп, көтмәгәндә килеп ҡаплаған бәхетенең сәбәпсеһе ятҡан яҡҡа күҙ һалды ла, секунд эсендә һикереп килеп тә торҙо - янындағы урын буш ине. Ой! Таңға табан ғына иртә менән тороп, сәйҙәр әҙерләп, үбеп кенә уятырмын, тип хыялланып ятҡайны, йүнһеҙ, йоҡлап киткән икән.

Ҡыҙ халатын юл ыңғайы кейә-кейә, яланаяҡ көйө аш бүлмәһенә ашыҡты. Арттан ғына килеп, сәй эсеп ултырған һөйгәненең муйынынан ҡосаҡларға ине иҫәбе. Унда булмағас, ваннаға юлланды, тик тегенеһе бында ла булмай сыҡты. Ә-әй! Ул бит ир кеше - тәмәке тарталыр. Тик ир тигәне балконда ла юҡ, балкон ишектәре үҙе көҙ ныҡлап ябып, ектәрен йәбештереп ҡуйғандан асылмаған.

Аптырауға ҡалды Ғәлиә. Шакир ағайҙарға киттеме икән? Киткәндер шул, үҙе төшкәсә йоҡлап ятҡас! Моғайын да, көттө-көттө лә, уятырға ҡыймай сығып китте инде. Ҡыҙ яланаяҡтарына тәпешкәләрен генә эләктереп, күҙ асып йомғансы күршеһенең ишеге төбөндә тора ине инде. Бер генә тәрән итеп тын алды ла ҡыңғырауға баҫты. Бел килке көттөргәндән һуң, ишекте Шакир ағай асты. Ғәлиә, тәүлектән ашыу йоҡлауҙан йөҙө шешмәкләнгән күршеһен, тегеһе иһә иртәнге сәғәттә халатта көйө генә май ҡояшындай булып балҡып торған ҡыҙҙы күреүҙән аптырап китте.

- Ҡарындаш?..

- Шакир ағай?.. Э-э... Ней... Ғаяз... бындамы?..

- Ғаяз? Ә-ә, ул малаймы? Әллә, мин ней, йоҡлап тик ятам... - Шакир ағай Ғаязды саҡырмаҡ булып, кире эскә инеп китте лә, фатирын урап сығып, тағы ишеккә килде. Борсолоп киткән. - Юҡ та ул егет, ҡәрендәш, кейеме лә юҡ. Яңы йылды бергә ҡаршыларбыҙ ҙа, ҡайтам, тей ине, ҡалай уңайһыҙ булды әле, ҡәрендәш, йоҡлап тик ятылған...

Ғәлиә артабан инде күршеһен тыңламай ине. Әле генә йәйғор булып балҡыған донъяһы өҫтөндә ҡапыл ер йыртып ялағай ялтланы ла, ҡолаҡтарҙы тондороп, йәшен атты. Уны атты йәшен. Кәүҙәһе ваҡ ҡына киҫәктәргә селпәрәмә килеп ваҡланды ла, ян-яҡҡа сәсрәп осто. Бары күҙгә күренмәҫ йәне генә яралы күбәләк ише елпелдәп фатирына осоп инде.

Ай, Алла... Аллам! Хоҙай! Киткән! Ташлап киткән! Нишләп? Нишләп улай иткән? "Ҡалдырмайым", "Йөрәгем ниһайәт үҙ һауытын тапты" тигән булғайны бит! "Бәхетем, ҡышҡы ҡояшым" тип яратты, иркәләне...

...Ә нимә теләгәйнең?.. Бер кистә хасил булған әҙәм, ҡайҙа барып башын терәргә, кемгә төртөлөргә белмәй йөрөгән ир кеше... "Ҡал" тип муйынына аҫылынғандан нишләп баш тартһын?!

...Ысын кеүек ине бит әйткәндәре, һөйләгәндәре, күкрәгенән һыҡрап сыҡҡан кеүек ине бит хистәре лә... Зәғифләнгән яҙмышына Ғәлиәнең сарыфланмаған наҙын ҡушып үрһә, икеһе бер бөтөн камил, түңәрәк булырҙар кеүек ине...

... Кемгә кәрәгем бар минең? Кем мине ысынлап ратһын? Кем? Кем...

...Әсе күҙ йәштәре башта юлаҡ-юлаҡ булып төштө, унан кемуҙарҙан йүгерешкән гөрләүектәргә әүерелде. Бер аҙҙан инде был дарья тотоп торғоһоҙ булып ҡотороп урғылды. Ҡыҙ әле генә, күптән түгел генә күктең етенсе ҡатында тирбәлгән түшәгендә, быуылып-быуылып, сәсәй-сәсәй, оҙон сәстәрендә бутала-бутала, яҫтығын әйләндереп-әйләндереп үкһене. Унан тынды. Тынды ла, үҙәген тарта-тарта, күҙ йәштәре ағып сығып бөткәндән эсендә өңөрәйеп ҡалған бушлыҡты тыңлап ятты. Ярай... ары нимә?..

Һорауына яуап итеп, ишек асылды. Кем булырға мөмкин? Нишләп ишеген бикләмәгән инде! Яҙа-йоҙа сәс-башын һыпырғылап, ҡаршы сыҡты. Сыҡты ла тағы ла бер тетрәнеү кисерҙе - унда бер ни булмаған кеүек, мәңге ошонда көн күргәндәй, Ғаяз өҫ кейемдәрен һалып тора. Үҙе ғәйепле тауыш менән хәбәрен теҙә:

- Байрам көнө лә инде бөгөн, Ғәлиә, бөтөнләй баштан сыҡҡан, асыҡ магазин эҙләп, бөтә ҡаланы ураным...

Бер аҙ торғас, Ғәлиә ҡысҡырып ебәрҙе:

- Ғаяз! Ҡайҙа булдың?

- Магазин эҙләнем, тейем бит, - кейемдәрен урынлаштырып йөрөгән егет был тауыштан, ниһайәт, ҡыҙға тура боролдо. - Ғәлиәм, нимә булды тағы?

- Мин... мин һине киткәнһеңдер тип уйланым... Һиңә кәрәгем юҡтыр... уйнағанһың да ташлағанһыңдыр, тип, ҡурҡтым...

Был бөтмәҫ йәштәр ҡайҙан сыға тиһең!

Егет көлә-көлә килеп, оялышынан ҡушуслап битен ҡаплаған ҡыҙҙы ҡосто, еүешләнеп бөткән сәстәрен һыпырҙы:

- Иҫәркәйем, мин бит һиңә Яңы йыл бүләге эҙләп йөрөнөм.

Ғәлиә ахыры йөҙөн асып, дымлы керпектәре аша йылмайҙы:

- Бүләк?.. Ниндәй бүләк?... Һин бит үҙең миңә Яңы йыл бүләге...

...Нишләп бәхет шулай һағыш-хәсрәт, күҙ йәштәре аша килә икән?

**(Аҙағы. Башы 51-52-се һандарҙа).**

# ИЖАД ТИП АТАЛҒАН ШӨҒӨЛ БАР,

## йәки Мәҙәниәт йылындағы ҡаҙаныштар тураһында

**РФ Президентының Рәсәйҙә һәм Башҡортостан Республикаһында 2014 йылды Мәҙәниәт йылы тип иғлан итеү тураһындағы Указы - халыҡтың рухи бөтөнлөгөн ҡайғыртыу, тип ҡабул ителергә тейештер. Мәҙәниәткә бөгөн хеҙмәтләндереү өлкәһе тип түгел, идеологик авангард, йәмғиәттәге әхлаҡ торошон билдәләүсе өлкә итеп ҡарау ваҡыты етте. Әлбиттә, ижтимағи тормоштоң үҙ ҡанундары, һәр замандың үҙ талаптары бар. Тик шуны онотorға ярамай, кешелектең ижад итеү тип аталған шөғөлө булған һәм бар. Үҙең тыуҙырған матурлыкты башҡалар менән бүлешеү ҙә - кешелек сифаты.**

Ил башлығы В. В. Путиндың "мәҙәниәт хеҙмәткәрҙәре халыҡтың ялын ойоштороуҙа төп позицияларҙы биләргә тейеш" тигәнен һәүәҫкәр сәнғәткә иғтибар йүнәлтеү тип тә аңларға кәрәк. "Беҙ үҙешмәкәр сәнғәт системаһын мәктәптән алып үҫтерәсәкбеҙ. Режиссермы, рәссаммы, хореографмы - балалар ижад түңәрәген ойоштороусы икән, уға шарттар булдырылырға, кәрәк булғандың барыһы ла эшләнергә, тәьмин ителергә тейеш", - тигәйне ул. Был йәһәттән республиканың социаль-мәҙәни тормошо ни хәлдә? Башҡортостандың мәҙәни-ял ойоштороу учреждениелары селтәре Рәсәй Федерацияһында иң ишлеһе - 2193 мәҙәни усаҡ иҫәпләнә, уларҙа шөғөлләнгән кешеләр һаны ла (18473), тамаша залдарындағы урындар буйынса ла күрһәткестәр иң яҡшылар рәтендә. Ауылдағы мәҙәниәт йорто, ғәҙәттә, әүҙем тормош алып барыусылар йыйылыр, байрам саралары үткәрер, йәнле аралашыу өсөн берҙән-бер урын һанала. Үҫмерҙәр, йәштәрҙән, үҙешмәкәр сәнғәт түңәрәктәрендә ҡатнашыусыларҙың буш ваҡыты ла шунда үтә. Рәсәйҙә үҙаллы ижад менән шөғөлләнеүселәрҙе бергә туплап, ҡурсалап торған ойошмалар булдырылыуға 100 йыллап ваҡыт үткән. Улар илдең һәр бер субъектында эшләп килгән Халыҡ ижады үҙәктәре (йорттары). Мәҙәни хеҙмәтләндереүҙе планлаштырыу, методик ярҙам күрһәтеү, күрһәткестәрҙе мониторинглау эштәре лә тап ошо ойошмалар бурысы.

Бөгөн заман талаптарына яуап бирерҙәй саралар үткәреү өсөн заманса йыһазландырылған мәҙәни усаҡ та кәрәк. Клуб тибындағы учреждениеларҙың иң күбеһе Әбйәлил, Баймаҡ, Күгәрсен, Яңауыл, Ҡариҙел, Учалы райондарында эшләй. Рәсәйҙә ҡабул ителгән 131-се Федераль законға ярашлы, бөгөн мәҙәниәт усаҡтары урындағы хакимиәттәр ҡарамағында көн күрә. Ауыл мәҙәниәт учреждениеларын төҙөү, капиталь төҙөкләндереү, матди базаларҙы нығытыу, сәхнә костюмдары тегеү, уйын ҡоралдары, тауыш аппаратуралары һатып алыу, компьютерлаштырыу кеүек ҙур сығымдар талап иткән эштәр ҙә улар иненә төшә. Мәҫәлән: республикала 470 бинаға (Дыуан, Мәсетле, Ҡариҙел, Асҡын, Шишмә, Федоровка, Дәүләкән муниципаль райондары, Күмертау, Ағиҙел, Межгорье, Стәрлетамаҡ, Нефтекама, Өфө ҡалалары) капиталь төҙөкләндереү талап ителә. Уның ҡарауы, Стәрлетамаҡ, Сибай, Салауат ҡалаларында, Әлшәй, Бишбүләк, Йәрмәкәй, Нуриман, Миәкә райондарында бындай киҫәкен хәлдәр юҡ тиерлек.

Заман беҙгә оптималләштереү тигән ҡанун индерҙе. Уның ыңғай яҡтарын барлаһаң, күптән өлгөрөп еткән мәсьәләләр ҙә барлығын күрәбеҙ. Йәмғиәттә сурытыла башлағаны - күпләп клубтар ябылыуы. Был осраҡта ябыу сәбәптәрен дә хәтергә төшөрөргә кәрәк. Ауылда кеше һаны кәмеүе, оло йәштәге кешеләр генә ҡалыуы, күрше ауылда ҙур мәҙәниәт усағы эшләүе сәбәпле лә клуб консервацияланырға тейеш. Был талаптар барыһы ла дәүләт тарафынан ҡабул ителгән нормативтарға таяна. Икенсе төрлө әйткәндә, Туймазы, Баймаҡ, Бәләбәй, Стәрлетамаҡ райондарындағы авария хәлендәге биналарҙың бәлә булмаҫ элек ябылыуы хәйерлерәк.

Уҙған Мәҙәниәт йылы сиктәрендә ниндәй ҙә булһа үҙгәрештәр, алға китеш булдымы? Мәҙәниәт министры Әминә Ивнәй ҡыҙы Шафиҡованың һөйләгәндәренә туҡталып китәйек:

- Рәсәй мәҙәниәт министрлығы менән берлектәге башланғыстарыбыҙ яҡшы ғына, - тигәйне ул. - Рәсәй Президенты Указына ярашлы, 2013 йылдан алып ауыл ерендә эшләп килгән мәҙәниәт учреждениеларына - 100-әр, хеҙмәткәрҙәргә - 50-шәр мең аҡсалата бүләкләү сараһы булдырылды. 2013 йылда федераль үҙәктән - 7 150 мең һум аҡса йәлеп ителде һәм конкурста еңгән 51 учреждение, 41 хеҙмәткәр иҫәбенә күсте. 2014 йылда министрлыҡ конкурста тағы ҡатнашты һәм республикаға 7650 мең һум аҡса бүленеүгә өлгәште, 55 учреждение һәм 43 хеҙмәткәр финанс дәртләндереү аласаҡ. Бынан тыш, матди базаны нығытыу өсөн республика бюджетынан 34 млн. һум ярҙам алдыҡ. Был сумма конкурс үткәндән һуң мәҙәниәт учреждениеларының матди базаһын нығытыу: яҡтыртыу, тауыш аппаратуралары, махсус сәхнә ҡорамалдары, музыка ҡоралдары алыу өсөн райондарға таратылды. Һөҙөмтәлә 9 автоклуб, 5 библиобус, 1 киномобиль һатып алынасаҡ, 49 балалар музыка мәктәбенең матди базаһы нығытыла, уларҙың 30 яңы музыка уйын ҡоралдары, 36 моделле китапхана, 23 виртуаль уҡыу залы, 5 моделле клуб, Бөрө ҡалаһында күп функциялы мәҙәни үҙәк төҙөү мөмкинселеге алдыҡ. Ауыл мәҙәни усаҡтарын модернизациялау буйынса ла эштәр ярайһы ғына булды. Мәҫәлән, Салауат районының Арҡаул, Ҡырмыҫҡалы районының Прибельский, Илтирәк, Ишембай районының Үрге Эткол ауылдарында күп функциялы мәҙәни үҙәктәр ишектәрен асты...

Һуңғы йылдарҙа сәнғәт һәм мәҙәниәт хеҙмәткәрҙәренә Башҡортостан Президенты гранттары бүленә башланы. Сумма ла ярайһы ғына. Иң уникаль тип табылған проекттарға 100 меңлек - 25 һәм 300 меңлек 5 грант бүленә. Былтырғы еңеүселәр араһында, мәҫәлән, Хәйбулла районы тәҡдим иткән "Дебет шәл һуғыу" кәсебен тергеҙеү проекты ла бар. Салауат районының "Йор үҙән" этнофестивале, Башҡортостан Республикаһының "өлгөлө" коллективтары араһында "Фолктан - модернға тиклем" конкурстары тәүге тапҡыр миллионлыҡ гранттар алыуға өлгәште.

Бер кемгә лә сер түгел, өлкәлә эш хаҡының иң түбән булыуы белгестәрҙе һөнәренән биҙҙерҙе. Ә бит музыкант йә бейеүсе булыу өсөн 5-6 йәштән махсус мәктәптә уҡый башлайҙар, артабан бар баҫҡыстарҙы үтеп, диплом алғас, түбән эш хаҡы, фатир юҡлығы көтә. Таныш һәм тиҙ генә үҙгәртеп булмай торған бурыстар былары. 2013 йылда республика етәкселеге мәҙәниәт хеҙмәткәрҙәрен фатир менән тәьмин итеү яйын тапты. Социаль торлаҡ төҙөү өсөн республика бюджетынан 50 млн. һум аҡса бүленде һәм фатирҙар арендаға бирелде. Быйыл фатир асҡыстарын Өфө, Салауат ҡалаларында, Балтас, Белорет Ишембай, Ҡырмыҫҡалы, Учалы райондарында 42 ғаилә алды. "Юл картаһы"на ярашлы эш хаҡы кимәленең артыуын мәҙәниәт һәм сәнғәт хеҙмәткәрҙәре үҙҙәре лә ыңғай баһалағандыр.

Кешене башҡа йән эйәһенән аҡыл һәм мәҙәни кимәл айыра. Муниципалитеттар араһында бер-береһе менән ярышып эшләү, сәм кеүек матур ғәҙәттәр әле юғалмаған. Урындағы хакимиәттәр ҙә үҙ халҡының мәҙәни үҫешен ҡайғырта. Йән башына иҫәпләнгән финанс сығымдар, мәҫәлән, Йылайыр, Ейәнсура, Бәкалы, Баймаҡ, Яңауыл райондарында һәм Межгорье ҡалаһында юғары. Компьютерҙар менән тәьмин итеү, уларҙы интернет селтәрҙәренә тоташтырыу ҙа хәҙер көнүҙәк мәсьәлә. Был йүнәлештә Өфө, Әлшәй, Ҡырмыҫҡалы, Саҡмағош, Мәләүез, Белорет, Бәләбәй райондары күп көс һала. Дөйөм алғанда, республикалағы 2193 учреждениеның ни бары 447-һе генә компьютерлаштырылған, 2013 йыл менән сағыштырғанда ул 135-кә күберәк тә бит, әммә урамда 21-се быуат икәнен дә онотмаҫҡа кәрәк.

Республикала иғлан ителгән Мәҙәниәт йылы сиктәрендәге план да яңы башланғыстар, яңы төр сараларҙы үҙ эсенә алды. Унда муниципаль берәмектәр араһындағы айырыуса йәнлелек менән барған "Башҡортостан Республикаһының мәҙәни баш ҡалаһы" марафоны, С.Юлаев исемендәге Дәүләт премияһы лауреаты, композитор Х.Әхмәтовтың тыуыуына 100 йыл тулыуға арналған юбилей кисәһе, Мәскәүҙә үткән Ф.Гәскәров исемендәге Дәүләт академия халыҡ бейеүҙәре ансамбленең юбилей концерты, "Библиотөн", асыҡ һауалағы "Симфоник төн", "Дискотөн" кеүек яңыса алымдар тәҡдим ителде һәм халыҡҡа оҡшаны. Ауыл кешеһенең мәҙәни ихтыяжын ҡәнәғәтләндереү йәһәтенән 2014 йыл һынылыш йылы булды, тиһәк тә хаталанмабыҙ. Башҡортостандың ыңғай имиджын булдырыуҙың баҙыҡ бер йүнәлеше булып ҡала барлыҡ ошо мәҙәни ҡаҙаныштарыбыҙ.

**Нәфисә ТУЛЫБАЕВА,**
**Республика халыҡ ижады үҙәгенең генераль директоры урынбаҫары.**

---

*ӘЙҘӘГЕҘ...*

# ҮҘЕБЕҘҘЕҢ ЙЫРҘАРҘЫ ЙЫРЛАЙЫҠ!

**Башҡортостан юлдаш телевидениеһында барған "Башҡорт йыры" проекты ла йыл ахырында үҙенең еңеүселәрен иғлан итте. Дүртенсе тапҡыр үткән бәйгенең Гала-концерты йылдың иң сағыу ваҡиғаһы, тип иҫәпләнергә хаҡы бар.**



Профессиональ йырсылар араһында ойошторолған "Башҡорт йыры" телевизион бәйгеһендә ҡатнашырға теләүселәр, ғәҙәттә, 100-ҙән ашыу була, улар араһынан финалға 11 башҡарыусы һайлап алына. Гала-концертта бәйгеселәрҙән тыш, эстрада йондоҙҙары ла ҡатнашты. Сара быйыл Өфөлә үтәсәк ШОС һәм БРИКС саммиттарына арналды. Алып барыусылар тамашасыларҙы был илдәрҙең мәҙәниәте менән таныштырҙы. Программала Ф. Гәскәров исемендәге Дәүләт академия халыҡ бейеүҙәре ансамбле лә сығыш яһаны.

Проект авторы, БР атҡаҙанған мәҙәниәт хеҙмәткәре Рита Өмөтбаева әйтеүенсә, профессиональ йырсылар өсөн бындай бәйгеләр ойошторолоуы бик кәрәк: "Халыҡ бейеүе рухты үҫтереүсе генә түгел, ә иң тәүҙә рухты уятыусы булып тора икән, башҡорттоң йыры ла ошондай уҡ үҙенсәлеккә эйә, - ти Рита Ришат ҡыҙы. - Элегерәк телевидениела бәләкәй генә студияла йырсыларҙы йырлатып, номерҙар төшөрә инек. Телевидениеның ошо матур башланғысын да иҫтә тотоп, халыҡ йырҙарын йырлаған йәштәрҙе лә күрһәтергә теләүҙән "Башҡорт йыры" проекты тыуҙы. Зәки Мәхмүтов, Абдулла Солтанов, Иншар Солтанбаев кеүек тәбиғилекте лә һаҡлап, вокал алымдарҙы ла дөрөҫ ҡулланып йырлаусы иҫ киткес йырсыларыбыҙ бар. Мин, мәҫәлән, халыҡ йырҙарын ошо йырсылар башҡарыуында тыңлайым һәм, ғәҙәттә, хәҙерге йырсыларҙы улар менән сағыштырам. Әйтергә кәрәк, тормошта үткәндәрҙән һабаҡ алып ҡына түгел, үткәндәрҙе өлгө итеп алырға ла мөмкин бит. Башҡарыу оҫталығы менән тап ошо йырсыларға тиңләшергә тырышыу - үҙе үҫеш. Ижадтағы иң ҙур яңылыҡ ана шулдыр ул".

"Башҡорт йыры - 2014" бәйгеһенең Гран-приһы быйыл бер кемгә лә тапшырылманы. Беренсе урынға Әбйәлил районынан йәш музыкант, ҡурайсы Рифмир Хөснөтдинов менән Гнесиндар исемендәге колледжды тамамлаусы йәш йырсы Айтуған Ғәйзуллин лайыҡ булды. "Йыл йыры" тигән юғары номинация Ришат Төхвәтуллиндың "Һандуғас" йырына тапшырылды.

ИНТЕРНЕТТАН



# БАЙРАМДА...

## ял итергә онотма

■ Ултырып эшләгән кешеләрҙә хроник сирҙәр йышыраҡ осрай, ти Канзас университеты ғалимдары. Һынауҙарҙа 45 йәштән 65 йәштәге ир-егеттәр ҡатнашҡан. Көндөң 4 сәғәттән артығыраҡ ваҡытын ултырып эшләүселәр араһында яман шеш сире, диабет, йөрәк-ҡан тамырҙары сирҙәре йышыраҡ осраған. Бигерәк тә водителдәр һәм офис хеҙмәткәрҙәре араһында был күренеш киң таралған. Кешенең ауырлығы, йәше, матди һәм социаль хәле, шулай уҡ белеме мөһим түгел.

■ Бала ҡулдарының әүҙемлеге ни тиклем юғарыраҡ булған һайын, уның фекерләү ҡеүәһе лә тиҙерәк үсешә, бала яҡшыраҡ һөйләшә. Белгестәр шуға ла китапты баланың ҡулына иртәрәк тоттороуға кәңәш итә. Ул уның биттәрен асырға маташҡанда ла, биттәрен һыйпап ҡарағанда ла ҡулдарға массаж яһала. Шулай уҡ балалар китаптары тәҡдим итеүсе етештереүселәрҙең төрлө уйынсыҡ формаһында яһалған китаптар ҙа бик унайлы.

■ Тормош кимәле юғары булған илдәрҙә йәшәүселәрҙең ғүмер оҙайлығы күберәк, һаулығы ла яҡшыраҡ, әммә иң бай илдең дә оло кешеләре хәтер насарайыуы менән яфалана. Ғалимдар раҫлауынса, өлкән йәштә лә теүәл аҡыллы булып ҡалыуға кешенең йәмғиәттәге статусы, байлығы түгел, ә даими рәүештә уйлау, фекерләү талап ителгән эштә эшләүе ярҙам итә. Эше стандарт булмаған мәсьәләләрҙе хәл итеү менән бәйле булғандар хаҡлы ялға сыҡҡас та юғары менталь статусын һаҡлап ҡала.

■ Мул табынлы Яңы йыл байрамы рационды тулыһынса үҙгәртә, был көндәрҙә беҙ тәм-томдо, майлы ризыҡтарҙы күберәк ашайбыҙ. Байрамдан һуң асығыу тойғоһо ла көсәйә, ял итеү һәм йоҡо ваҡыты үҙгәрә. Шуға ла психологтар эшкә сығыр алдынан ураҙа тотоп алырға кәңәш итә. Көнө буйы һыу эсеп кенә йөрөп тә организмды ял иттереп алырға була. Әммә хроник сирҙәре булғандарға, ашҡаҙандың сей яралары, гастрит, аллергия менән яфаланыусыларға был тыйыла. Йәшел сәй шулай уҡ матдәләр алышыныуын әүҙемләштерә.

■ Белгестәр иҫәпләп сығарыуынса, кеше үҙенең ғүмеренең дүрттән бер өлөшөн йоҡлап үткәрә. Эштә коллегалар менән аралашыу, шулай уҡ социаль селтәрҙәр яҡынса 9 йыл ғүмерҙе ала. 3 йыл - транспортта эшкә йөрөүгә сарыф ителә, магазиндар буйлап йөрөүгә шулай уҡ дөйөм 4 йыл тирәһе ваҡыт кәрәк. Шуға ла ғалимдар көн тәртибен ныҡлап уйлап, кәрәкмәгән күп нәмәләрҙән баш тартырға кәңәш итә.

■ Швеция ғалимдары белдереүенсә, йоҡоһоҙ үткәрелгән төн баш мейеһенә насар йоғонто яһай, был хатта баш йәрәхәте алғандағы кеүек эҙемтәләргә эйә. Мәҫәлән, баш мейеһе һелкенгәндә ҡанда химик матдәләр кимәле күтәрелә, йоҡоһоҙ үткәргән төндән һуң ҡанда ошондай уҡ процестар күҙәтелә. Уппсала университеты ғалимдары төндә йоҡламаған бер төркөм кешеләрҙән ҡан анализы ала. Уларҙың ҡанында NSE һәм S-100B матдәләре кимәле күтәрелгән була, улар шулай уҡ баш йәрәхәте - мейе һелкенеүен билдәләүсе күрһәткестәр иҫәпләнә. Элегерәк ғалимдар кеше йоҡлаған саҡта баш мейеһенең көн дауамында йыйылған токсиндарҙан таҙарыныуын асыҡлағайны. Үҙ сиратында, токсиндар алда телгә алынған матдәләрҙең кимәле күтәрелеүгә лә килтерә, был мейе туҡымаһын юғалтыуға булышлыҡ итә.

ЫШАННАҢ - ЫШАН

**Астрологтар киләһе йылды Күк (Йәшел) Кәзә йылы тип билдәләй. Был йыл ауырлыҡтарҙы еңеү йылы булыр, ахыры. Кире йоғонто яһаусы Марс ҡатмарлы геополитик ситуация тыуҙырасаҡ, бының менән һәр алдынғы дәүләт осрашасаҡ. Ҡытай календары буйынса, Кәзә аҡыл, ихтыяр көсө символы. Шул уҡ ваҡытта ул мәкерле хайуан да.**

**Үсеш йәһәтенән, йыл асыштарға, яңы һәләтле шәхестәрҙең күбәйеүенә бай буласаҡ. Сәнәғәт үсешәсәк, шулай уҡ ғилми өлкәлә алға китеш булыр. Сәйәсәттә лә мөнәсәбәттәр киҫкенләшеүе бар. Күптәрҙә көнкүреш ҡыйынлыҡтары өҫкә ҡалҡып сығыр. Һәр кем матди хәлен яҡшыртырға тырышһа ла, ҡапыл ғына яҡшы тормош килмәҫ. Аҡсаны банктарҙа һаҡлау шулай уҡ хәүефле. Йылдың хужаһы унлы-һуллы аҡса туҙҙырыусыларҙы ла яратмай.**

**Астрологтар раҫлауынса, был йылда хыял диңгеҙендә йөҙөүгә ҡарағанда, алдыңа дөрөҫ маҡсаттар ҡуйып йәшәү күпкә уңышлыраҡ буласаҡ. Кемдәндер ярҙам көтөүселәрҙең өмөтө аҡланмаҫ, ахыры. Барыны ла үҙегеҙҙең көсөгөҙҙән, тырышлығығыҙҙан торған эштәр еңелерәк башҡарыласаҡ. Был йыл белем алыу, квалификацияны камиллаштырыу, уйҙағы пландарҙы тормошҡа ашырыу мәле. 2015 йылда аҡыл талап ителгән һөнәр эйәләренең - аналитик, сәйәсмән, уҡытыусыларҙың эше алға китәсәк. Ижади һөнәр эйәләре лә бөтөн уйҙарын тормошҡа ашыра алыр. Йылҡы йылы менән сағыштырғанда, Кәзә йылы тынысыраҡ үтер. Кәзә шәп, йылғыр хайуан, шуға ла был йылда тиҙлек мөһим.**

# КҮК КӘЗӘ ЙЫЛЫ...

## ауырлыҡтарҙы еңеү йылы тип нарыҡлана



Ниндәйҙер уңышҡа өлгәшеү өсөн **ҡуҙыға** бер аҙ үҙен үҙгәртергә кәңәш итә йондоҙҙар. Нимә уйлағанығыҙҙы кешегә тура бәреп әйтеү был йылда конфликттарға килтерәсәк, шуға ла яңы дуҫтар табырға, элеккеләрен юғалтмаҫҡа теләһәгеҙ, һығылмалыраҡ булығыҙ. Кешене тәнҡитләгәнсе, уны маҡтау күпкә уңайлыраҡ, ти белгестәр. Күк Кәзә йылында күптәр шәхси мәсьәләләр менән булышыр, шуға ла ҡуҙыларҙың яңы идеяларын һәм пландарын күтәреп алыусылар булмаясаҡ. Әгәр ҙә маҡсаттарығыҙға өлгәшеү өсөн ситтәрҙең ярҙамы кәрәк икән, бындай проекттарҙы быйылға ҡуҙғатмай тороуығыҙ хәйерле. Башҡаларҙың тойғолары менән уйнамай, үҙ көсөнә ышанырға өйрәнһә, ҡуҙы был йыл тәҡдим иткән бөтөн мөмкинлектәрҙе ҡуллана аласаҡ. 2015 йылдың көҙөндә шәхси тормошталы бәхет эштәре проблемаларҙан өҫтөнөрәк торасаҡ. Көҙ аҙағы - ҡыш ҡуҙыларҙың тормошонда бик мөһим мәл. Быға тиклем мөһим тип һанаған күп нәмәләрҙән баш тартып, ғаиләне тәүге урынға ҡуйырһығыҙ. Ошо уҡ мәлдә йыраҡҡа сәйәхәт көтөлә.

**Буға** өсөн йыл бик уңышлы булмаҡсы. Тырыш, уртаҡ ҡыҙыҡһыныуҙар таба белгән буға өсөн йыл яңы ишектәр асасаҡ. Буға өсөн ғәҙеллек тәүге урында. Шуға ла һеҙгә үҙ-үҙегеҙ һәм башҡалар алдында ғәҙел булыу мөһим. Башҡаларҙың фекеренә ҡарағанда, үҙ намыҫығыҙға таянып ҡарарҙар ҡабул итегеҙ. Күнелегеҙгә ҡаршы килеп, еңел юлдар эҙләмәгәндә генә йондоҙҙар һеҙҙең яҡта булыр. 2015 йыл күп нәмә бирәсәк, әммә үҙе лә күпте талап итәсәк. Рухи үсеш, ғилем туплау өсөн күп тырышырға тура килер. Ғинуар аҙағына тиклем күп эштәрҙе эшләп ҡалырға кәрәк, сөнки февралдән алып яҙ миҙгеле тамамланғансы беренсе урынға күңел асыуҙар, балалар, сәйәхәттәр сығыр. Иң уңышлы осор - ҡыш аҙағы һәм яҙ.

Бер урында ултырып сыҙамаған һәм фекере минут һайын үҙгәреп торған **игеҙәктәр** өсөн тыныс йыл. Күк Кәзә йылында уҡыуҙа ла, эштә лә, шәхси тормошта ла уңыш йылмайыр. Күптән йыйылып киткән эштәр һәм пландарҙы тәртипкә килтереп буласаҡ. Әгәр ҙә юҡҡа үпкәләп барыу кеүек сифаттарын теҙгендә тота алһалар, игеҙәктәр бөтөн һәләттәрен тулы ҡеүәтендә ҡулланыу мөмкинлегенә эйә.

2015 йылдың тәүге айында уҡ йәмғиәттәге яңы ваҡиғалар игеҙәктәргә яңы мөмкинлектәр асыр. Аҡса, мөхәббәт, өй, эш, абруй үҙ аяҡтарында ныҡлы баҫып торасаҡ, һеҙгә бары ваҡытываҡыты менән үҙ позицияғыҙҙы раҫлап алыу ғына кәрәк булыр.

**Ҡыҫала** был йылда башкөллөй үҙ эштәренә сумасаҡ. Бер яҡтан, ул уйлап

ӘЙҘӘГЕҘ...

# СӘЛӘМӘТ БУЛАЙЫҠ!

**Бер ваҡыт Далай-Ламанан уны нимә аптыратыуы тураһында һорайҙар. Ул: "Кеше. Башта ул аҡса эшләү өсөн үҙенең сәләмәтлеген ҡорбан итә. Һуңынан сәләмәтлеген тергеҙеү өсөн аҡса туҙҙыра. Шул уҡ ваҡытта ул үҙенең киләсәге тураһында уйлап, шул тиклем борсола, хатта бөгөнгө менән ләззәтләнергә ваҡыты ла ҡалмай. Һөҙөмтәлә ул бөгөнгө менән дә, киләсәк менән дә йәшәмәй. Ул бер ваҡытта ла үлмәҫ кеүек йәшәй, ә үлгәндә инде йәшәмәгәнлеге өсөн үкенә", - ти.**

Эйе, күптәр ошондай йәшәү рәүешен һайлаған. Әммә һаулығыңды хәстәрләү өсөн бер ваҡытта ла һуң түгел. Сәләмәтлеккә саҡырыуҙы 40 йыл ғүмерен кешеләрҙе дауалауға бағышлаған, Һуғыш ветерандарының республика клиник госпитале табип-терапевты Альмира Хәсәйенова ауыҙынан әйттерәйек, булмаһа:

- Рощинский совхозында эшләгәндә бик шәп бер пациентым, мин уны хатта остазым тиер инем, булды. Давид Сергеевич Ефимов Бөйөк Ватан һуғышы ветераны ине. Ул килеп ингәс, мин уға 60 йәштер тип уйлағайным, бәхтиһәң, уға 83 йәш булып сыкты. Джинсы костюмда, егеттәр кеүек етеҙ хәрәкәтле. Һораша башлағас, уның көн һайын иртән ике саҡырым алыҫлыкта ятҡан күрше ауылды йүгереп урап ҡайтҡанын, һалҡын һыу менән ҡойонғанын белдем. Шулай уҡ ул тын алыу гимнастикаһын, үҙәти гимнастика яһай, ғүмүмән, көнөнә ике сәғәт үҙенең сәләмәтлегенә бағышлай икән. Шул уҡ ваҡытта 83 йәшендә лә колхозда ер үлсәүсе булып эшләй ине. Үҙе менән 60 йәшендә генә шөғөлләнә башлаған. Эсеүен, тартыуын ташлаған. Мин эшләгән ваҡытта ул бер тапҡыр ҙа сирләмәне. 93 йәшендә вафат булды. Ә бит 63 йәшенә тиклем һуғышты үткән, партизандарҙа йөрөгән, ҡышҡы һыуыҡтарҙа туңған.

Йәки бына 91 йәшлек бер кешене беләм. Ошо йәшендә ул ҡапыл үҙенең хәтере насарланыуын һиҙеп ҡала һәм көн һайын шиғыр ятлай башлай. Бер йыл эсендә йәшәгән йылдары иҫәбенән сығып 91 шиғыр, бынан тыш Твардовскийҙың "Василий Теркин"ын тулыһынса ятлай. Бының менән нимә әйтергә теләйем: кеше нисә йәштә булыуына ҡарамаҫтан, уның мөмкинлектәре сикһеҙ.

Шуға күрә бөгөндән башлап үҙ сәләмәтлегегеҙ өсөн яуаплылыҡты үҙ ҡулығыҙға алырға теләһәгеҙ, тәү сиратта ялҡаулыҡтан ҡотолорға кәңәш итәм. Ялҡаулыҡ - кешенең иң алама юлдашы. Иртән уяныу менән тәҙрәгеҙҙе асып, бүлмәгеҙҙе елләтегеҙ, тәрән итеп тын алығыҙ һәм гимнастика яһағыҙ. Хатта урындан тормай ғына ла гимнастика яһарға мөмкин. Эсеү, тәмәке тартыу кеүек кире күренештәрҙе тормошоғоҙҙан бөтөнләй алып ташлағыҙ. Сәләмәт ризыҡ менән туҡланығыҙ, хайуан майҙарын мөмкин тиклем аҙыраҡ ҡулланығыҙ. Саф һауала күберәк йөрөгөҙ, йүгерегеҙ. Күберәк хәрәкәтләнегеҙ. Юҡҡа ғына, хәрәкәттә - бәрәкәт, тимәгәндәр. Тормош хәрәкәткә ҡоролған...

**Зәйтүнә ӘЙЛЕ.**

йөрөгән күп эштәрен башҡарып өлгөрәсәк, икенсе яҡтан, тирә-йүнендәге кешеләр менән бәйләнеште юғалтыу хәүефе лә бар. Шуға ла 2015 йылда ҡыҫалаға үҙ-үҙенә бикләнергә ярамай, киреһенсә, йышыраҡ дуҫтары менән аралашырға, ҡунаҡҡа йөрөргә, спорт менән шөғөлләнергә кәңәш ителә. Фән һәм әҙәбиәт өлкәһендә эшләгән ҡыҫалаларға уңыш йылмаясаҡ. Был йылда ҡыҫалаға төрлө тойғолар кисерергә тура киләсәк, бөтәһе лә яйлы барған мәлдә лә һағыш, төшөнкөлөк, яңғыҙлыҡ йыш ҡунаҡҡа әйләнәсәк. Тормошоғоҙҙан күп дуҫтар һәм таныштар китер, бары тик ваҡыт һынауын үткәндәр генә ҡалыр. Был йыл рухи көстө күп алыр. Ҡыҫалаға был ауырлыҡтарҙы һынау итеп ҡабул итергә һәм лайыҡлы үтергә кәрәк. Йәй яңы танышлыҡтар, ҡыҙыҡлы тәҡдимдәр ҡабул итергә әҙерләнегеҙ. Йылдың икенсе яртыһында ғаилә, балалар һәм һөйгәнегеҙ беренсе урынға сығыр.

2015 йылда **арыҫландың** донъяға ҡараштары үҙгәрер, моғайын. Быға тиклем мөһим булып тойолған әйберҙәр икенсе планға күсер, кәрәкмәгән ҡыҙыҡһыныуҙарҙан, пландарҙан, хатта кешеләрҙән ҡотолорға тура килер. Арыҫлан был йылда күп ваҡытын өйөнә, ғаиләһенә бағышлаясаҡ. Урынһыҙ мин-минлек кешеләр менән аралашыуға ҡамасаулаясаҡ. Шуға ла һүҙҙә генә булһа ла башҡаларҙың фекеренә ихтирамлы булырға кәңәш итә йондоҙҙар. Август айынан башлап, шәхси уңышҡа өмөт итә алаһығыҙ. Эштә лә, йәмғиәттә лә абруй яуларһығыҙ.

**Ҡыҙҙың** был йылда көсө ташып торасаҡ, әммә улар үҙҙәре өсөн мөһим булмаған әйберҙәргә тотоноп, был энергияны юҡҡа исрафлап бөтөүе бар. 2015 йыл улар өсөн иң мөһиме - дөрөҫ маҡсат һайлау. Ваҡ-төйәккә күҙ йоморға өйрәнеп, лайыҡлы бейеклектәрҙе яулау күпкә ҡыҙыҡлыраҡ. 2015 йылда ҙур эштәр башҡарасаҡһығыҙ. Алған белемегеҙҙе, нимәгә һәләтле икәнегеҙҙе күрһәтеү өсөн мәл етте. Йылдың тәүге яртыһында бөтөн мөмкинлектәрегеҙҙе ҡуллана алырһығыҙ, көҙ иһә эшегеҙҙең уңыштарын йыйырһығыҙ. Ниндәйҙер йыраҡ юл тормошҡа ҡарашығыҙҙы үҙгәртәсәк. Икенсе илгә сәйәхәт, хатта күсеп китеү тураһында уйлана башларһығыҙ. Ситтән ҡунаҡтар килеүе лә көтөлә. 2015 йылдың аҙағында ҡыҙҙар ҙур килем аласаҡ.

**Үлсәүҙәр** башында мең төрлө уй, әммә юҡҡа икеләнеп, ул уларҙың береһен дә тормошҡа ашыра алмауы бар. Әгәр ҙә үлсәүҙәр уңышҡа өлгәшергә теләһә, уға тәүәккәл булырға кәрәк. Күп уйлау, ыңғай һәм кире яҡтарҙы күп "үлсәү" хаталарға килтерәсәк. Бик булмаһа, үлсәүҙәр үҙ өҫтөнән етәкселек итеүҙе башҡа берәүгә йөкмәтергә тейеш. Был кәңәште үлсәүҙәр шәхси тормоштағы мәсьәләләрҙе хәл иткәндә лә иҫендә тоторға бурыслы. Ғөмүмән, был йылда күп эшләргә тура киләсәк, тәүге планға финанс мәсьәләләре сығасаҡ. 2015 йылдың яҙында һайлау алдында торасаҡһығыҙ, йә карьера баҫҡысы буйлап күтәреләһегеҙ, йәки эшегеҙҙе алыштыраһығыҙ. Ҡайһы юлды ғына һайлаһағыҙ ҙа, еңел булмаясаҡ. Йыл буйына әхлаҡи һәм рухи характерҙағы бурыстарҙы ҡайтарыу мәле булыр, иҫке, онотола төшкән мөнәсәбәттәр яңырыр.

**Саян** өсөн йыл тынғыһыҙ, шулай ҙа ҡыҙыҡлы булыр. Был билдәнең энергияһы Күк Кәзә йылының холҡона тап килә, шуға ла уның өсөн был йылда мөмкин булмаған нәмә юҡ. 2015 йылда тормошоғоҙ үткәндәрегеҙ менән бәйле буласаҡ. Саяндың быға тиклем һалған тырышлығы ҙур һөҙөмтәләргә килтерәсәк, ҡыҫҡаһы, был йылда бөтөн нәмә үҙегеҙгә әйләнеп ҡайтасаҡ. Иҫке проблемаларҙан ҡотолоп, ирекле шәхес булыуға ла өлгәшә алырһығыҙ. Әммә азатлыҡтың саян өсөн яңғыҙлыҡҡа әйләнеүе бар. Ниндәйҙер уртаҡ эштәр менән бәйле дуҫтарығыҙ һеҙҙең ярҙамға мохтаж буласаҡ.

2015 йылдың башы ижадта һәм мөхәббәттә уңыштар алып килә. Яҙ һәм йәй башында килемле эшлекле тәҡдимдәр көтөгөҙ, ошо уҡ мәлдә төҙөлөш эштәрен башлау яҡшы булыр. Көҙ уртаһында сәләмәтлеккә һәм күсемһеҙ милеккә иғтибар бүлергә тура килер.

**Уҡсыға** йыл күп ыңғай тойғолар бүләк итер. Әммә йыл башынан уҡ ғаилә һәм карьера, етәкселәр һәм йорт хәстәрҙәре араһында өҙгөләнергә тура килеүе бар. Бары тик йылдың икенсе яртыһында иркен тын алып ҡалырһығыҙ. Йәй айында бәхетле юлдар көтә, хатта сит илдәге хеҙмәттәштәрҙән ниндәйҙер эшлекле тәҡдимдәр булыр, ахыры. Көҙ күптәнге хыялдарығыҙ тормошҡа ашыр. Ошо уҡ мәлдә эш урынын алыштырыу мөмкинлеге булыр. 2015 йыл быйылғыһы кеүек ваҡиғаларға артыҡ бай булмаҫ, әммә өҫтәмә аҡса эшләү мөмкинлеге тыуыр. Ҡыҫҡаһы, йондоҙҙар уҡсының теләктәрен тормошҡа ашырырға ярҙам итәсәк, бының өсөн уға дөрөҫ юл һайлай белергә генә кәрәк.

**Кәзәмөгөҙ** өсөн үҙгәрештәр мәле килә. Пландарҙы тормошҡа ашырыу, эш урынын алыштырыу өсөн бик уңайлы ваҡыт. Йондоҙҙар уға был йылда бөтөн мәсьәләләрҙе хәл итергә кәңәш бирә.

Кәзәмөгөҙ 2015 йылда һәр ваҡыт иғтибар уртаһында булыр, хатта ял итеп алырға ла ваҡыт булмаясаҡ. Ҡыш уртаһында булған ниндәйҙер яңы танышыу тормошоғоҙҙо тағы ла ҡыҙыҡлыраҡ итәсәк. Эштә хеҙмәттәштәр араһында барған бәхәстәргә ҡыҫылмау төрлө бәләләрҙән һаҡлаясаҡ. Йәй аҙағы һәм көҙ башында эштә лә, шәхси тормошта ла яңы юлдар асылыр. Ниндәйҙер тәҡдимдән баш тартмау өсөн йәшәү урынын үҙгәртергә лә тура килер, моғайын. Кәзәмөгөҙҙөң йыл дауамында финанс хәле тотороҡло булыр.

**Һыуғояр** 2015 йылдың тәүге яртыһында бар иғтибарын балаларына һәм яратҡан кешеләренә йүнәлтер. Улар йыл буйына йорт һалыр, ғаилә менән шөғөлләнер, яҡты киләсәк өсөн тырышып хеҙмәт итер. Көҙөн һыуғоярҙы ҙур үҙгәрештәр көтә. Юлында осраған кәртәләрҙе элекке тоғро дуҫтар ярҙамында хәл итергә мөмкин буласаҡ. Эске тойғоһона таянып эш итһә, һыуғоярҙың әргәһендә барған үҙгәрештәр уға артыҡ ҡағылмаясаҡ. 2015 йылда тормошто үҙгәртеү кәңәш ителмәй, был йылды ниндәйҙер һығымталар яһау мәле, тип ҡабул итергә кәрәк. Яҙ башында ниндәйҙер шәхси эш асыу мөмкинлеге тыуыр. Ошо уҡ ваҡытта ғашиҡ булырһығыҙ, моғайын.

Йылдың икенсе яртыһында тормошоғоҙҙа яңы этап башланыр. Дуҫтарығыҙҙың тоғролоғон һынау мәле етер. Көҙ башында эшлекле тәҡдим булыр. Үҙгәрештәр һыуғоярҙарҙың рухын нығытыр.

**Балыҡтар** өсөн үҙгәрештәр 2014 йылда уҡ башланғайны. 2015 йыл башында алдығыҙҙа күп мөмкинлек асылыр. Балыҡтарға, ниндәй йүнәлештә эшмәкәрлек алып барыуҙарына ҡармаҫтан, уйлап эш итеү кәрәк булыр. Йәмғиәттәге ғәҙелһеҙлек менән көрәшеүгә ҡарағанда, яңы тормошҡа йә яраҡлашырға, йә уны нисек бар, шулай ҡабул итергә кәңәш ителә. 2015 йылда балаларығыҙға күберәк иғтибар талап ителәсәк. Йылдың тәүге яртыһында матди яҡты яҡшыртыу, шәхси тормошҡа ҡағылған мәсьәләләрҙе хәл итеү менән үтер. Яҙҙың икенсе яртыһы, ҡыштың аҙағы шулай уҡ бик уңышлы булмаҡсы. Көҙ эшлекле килешеүҙәрҙең өҙөлөүе кеүек күңелһеҙ ваҡиғалар булыуы ихтимал. Дуҫтарығыҙҙың ярҙамы менән бар эштәрегеҙҙе яйлай алырһығыҙ, моғайын. 2015 йылдың ҡышында тормошоғоҙҙа яңы кимәлгә күсерһегеҙ, алдығыҙҙа бар юлдар асылыр.

*ДАУАМ ИТЕП...*

# ХОЛҠО ҮҘГӘРЕҮСӘН...

## тимәк, көтөлмәгән хәлдәр алдында ла ҡалыуың бар

**Көнсығыш йондоҙнамәһенә ярашлы, 2015 йыл Кәзә йылы тип нарыҡлана. Кәзә йылы яҡшылыҡ һәм яҡтылыҡ энергетикаһы алып килә, ул рухи күтәренкелек, ғәйрәтлелек һәм йомшаҡлыҡ символы. Ләкин был хайуандың осло ғына ике мөгөҙө барлығы хаҡында ла онотоорға ярамай - кәрәк булһа, һөҙөргә лә күп һорамаҫ. Яңы йылдың ҡурсалаусыһын нисек үҙ яғыңа ауҙарырға һәм уңышҡа өлгәшергә?**

Яңы йылда ярҙамсыллыҡ һәм киң күңеллелек кеүек сифаттар баһалы буласаҡ. Киләһе йылда ҡылған һәр яҡшылыҡ тиҙ арала кире әйләнеп ҡайтасаҡ, тип ышандыра астрологтар. Ә кемгәлер яуызлыҡ эшләү йәки насар уйлы булыу, киреһенсә, һәр башланғысҡа кәртә ҡуйып, пландарҙың тормошҡа ашыуына ҡамасаулаясаҡ, ти улар.

Кәзә йылында әүҙем аралашыу, яңы таныштар булдырыу һәм элекке бәйләнештәрҙе өҙмәү кәңәш ителә. Дуҫтар менән тығыҙ мөнәсәбәттә булыу үҙенең ыңғай ролен уйнамай ҡалмаясаҡ. Яңы йылдың символы ҡунаҡсыл хайуан, шуға күрә дуҫтарҙы өйгә йышыраҡ саҡырыу бәйләнештең туҡтамауына булышлыҡ итәсәк.

Киләһе йылда карьера буйынса юғары үрләргә теләүселәргә үҙҙәрен ижади яҡтан күрһәтергә кәрәк, тигән фекерҙә астрология белгестәре. Шуны иҫтә тотоу мөһим - холҡо йыш үҙгәреп тороусы Кәзә һәр кемде стандарт булмаған ҡарарҙар ҡабул итергә кәрәкле төрлө хәлдәргә ҡуясаҡ. Был осраҡта бик һаҡ һәм уйлап эш итеү фарыз. Булған тәжрибә багажы һәм башҡаларҙың кәңәштәре күп осраҡта ярҙам итә алмаясаҡ, шуға күрә, донъяға ҡарашты һәм фекерләү рәүешен үҙгәртеү ваҡыты еткәнлеген һәр кем аңлаясаҡ.

2015 йылда килемде арттырыу өсөн дә үҙеңде үҙгәртергә һәм яңыса ҡарарҙар ҡабул итергә өйрәнергә кәрәк булыуын һыҙыҡ өҫтөнә ала белгестәр. Кем ошоға әҙер, уны бәхетле һәм мул йыл көтә.

Шәхси тормоштағы уңыш һөйгәндәрҙең бер-береһенә булған мөхәббәтенән һәм хәстәрлегенән тора. Мин-минлелек, тәкәбберлек, һауалылыҡ һәм ҡомһоҙлоҡ һөйөү өлкәһендә хәлдәрен яҡшыртырға теләүселәргә ҡамасаулаясаҡ. Яңы йыл төнөндә үҙегеҙҙе ғәзиз һәм ҡәҙерле булған кешеләр һәм әйберҙәр менән уратып алыу киләһе йылда ҙур уңыштарға юл асасаҡ һәм шатлыҡлы көндәр бүләк итәсәк.

*УҢЫШ ҠАҘАН*



# НИ ӨСӨН ҺЕҘ АУЫРЫУ ҺӘМ ЯРЛЫ?

**Тәмле һәм сәләмәт булмаған ризыҡ: тәнегеҙгә баш булыу өсөн көрәш**

**Һеҙҙе сирле, һимеҙ һәм һүлпән итеү өсөн аҫтыртын эшмәкәрлек**

Уңыш ҡаҙаныуға арналған бер генә китап та, әгәр унда физик сәләмәтлек тураһында яҙылған бүлек юҡ икән, тулы була алмай. Әлбиттә, тормош именлегендә иң мөһиме булып сәләмәтлек тороуы буйынса бәхәсләшергә мөмкин, әммә тап ошо аспектҡа иғтибар аҙ бүленә. Ғәмәлдә, кешеләр бик йыш эш урыны, карьера, ниндәйҙер күләмдә аҡса эшләү хаҡына сәләмәтлеген ҡорбан итә. Әммә иртәме, һуңмы, шул асыҡлана: ҡорбан үҙен аҡламай. Пенсияға бер аҙ байлыҡ туплап, әммә сирле булып сығыу - яҙмыштың әсе көлөүе ул.

Кешеләр бер ваҡытта ла хыялдарын тормошҡа ашырмауҙың тағы бер сәбәбе бар - аҡыл, ныҡлы һаулыҡ һәм маҡсаттарға өлгәшеү өсөн кәрәкле энергияның етмәүе. Мин йылдар буйы үҙ-үҙемә, аңым кеүек үк тәнемде лә һәр саҡ сәләмәт итеп тотһам, бай буласаҡмын, тип һеңдерҙем. Һөҙөмтәлә мөмкинлектән артығыраҡ эшләй алырлыҡ сәләмәтлеккә эйә булдым. Әгәр һеҙ күпселек кеүек йәшәһәгеҙ, сәләмәтлегегеҙ уңыш юлында үҙегеҙ булырға теләгән этапҡа тап килмәйҙер.

Һуңғы 30 йылда сәләмәтлеккә, һаулыҡ һаҡлауға ҡағылышлы өлкәләрҙә алға китеш күҙәтелде һәм был күптәрҙе ҡыуандырҙы. Күп сирҙәргә дарыуҙар уйлап табылды, сирҙәрҙе туҡтатыусы алымдар эшләнде, шулай уҡ туҡланыу өлкәһендә лә алға ҙур аҙым яһалды. Һөҙөмтәлә күпселек оҙағыраҡ йәшәй башланы, әммә улар ғүмерҙәренең һуңғы йылдарын ағыулаусы башҡа сирҙәргә дусар булды. Тотош эпидемиялар барлыҡҡа килде: ҡанда холестериндың артыҡ булыуы, ҡан баҫымының күтәрелеүе, йөрәк өйәнәктәре, шәкәр сире, артрит, Альцгеймер ауырыуы һ.б.

Был көрсөк ҡайҙан барлыҡҡа килә һуң? Миңенсә, ашаған ризыҡтарыбыҙ ашалыр. Аҙыҡ-түлектең беренсе зыянлы үҙенсәлеге - унда планлы рәүештә бәйләнгәнлек барлыҡҡа килтереү. Чипсы етештергән компанияның, "Бәхәсләшәйек, тыйылып тора алмаясаҡһығыҙ", тигән һүҙҙәре ғәмәлдә бик етди һәм ризыҡҡа бәйлелекте уйлап эшләнгән.

